ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

16-22 апрель (алағарай) 2022

№15 (1005)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иркле

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**

Халыҡ сәнғәте яҙмышын... кем хәстәрләр һәм тергеҙер? 8-9



Йыраусы йырсы 11



Тир сығарыр мәл 13



Һәр бейеүҙә... халыҡ рухы 15



ТВ-программа 14

*Кемдер берәү әрләшә башлағас, әрләнеүсе ситкә китә. Әрләшеүсе уның артынан бара һәм: "Ниңә китәһең?" - тип һорай. Әрләнеүсе яуап бирә: "Һинең хоҡуғың - әрләшеү, ә минеке - тыңламау". Берәүгә һорау бирәләр. Ул яуап бирә алмай һәм әрләшә башлай. Уға шулай тип әйтәләр: "Әлбиттә, һиңә һорауға яуап биреүгә ҡарағанда, үҙ наҙанлығыңды йәшереү өсөн әрләшеү еңелерәк". Яман һүҙлеләр - ҡырағай хайуандың иң хәтәре, ялағай һүҙлеләр - йорт хайуандарының иң ҡурҡынысы.*

*(Диоген).*

БЕҘҘӘ БАЙРАМ!

## МИНЕҢ МИЛЛИ КЕЙЕМЕМ

Мәғлүм булыуынса, 16 апрелдә сағыу байрам - Башҡортостан халыҡтарының милли кейем көнө билдәләнә. Ошо айҡанлы 14-16 апрелдә республикала төрлө саралар уҙғарыла. Байрам үҙенсәлектәренә килгәндә, 2020 йылдан ул төбәктә йылына ике тапҡыр - апрелдә һәм сентябрҙә ойошторола һәм Башҡортостанда йәшәгән төрлө халыҡтарҙың мәҙәниәтенә, йола-традицияларына ҡабат мөрәжәғәт итеү, уларҙы танып белеү мөмкинлеген бирә. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ла был сараларҙан ситтә ҡалмаясаҡ: беҙ ошо сағыу байрам айҡанлы үҙенсәлекле флешмоб иғлан итәбеҙ. Уның шарттары ябай:

- Милли кейемдә йәки уның элементтарын ҡулланып, үҙегеҙ йәшәгән төбәкте билдәләгән урында фото төшөгөҙ;
- Был фото менән социаль селтәрҙә бүлешегеҙ һәм #НациональныйКостюм2022 #МиллиКейем2022 хештегтарын ҡулланығыҙ.

Был сара, һис шикһеҙ, беҙгә рухи берҙәмлек тойғоһо бирәсәк һәм күңелдәрҙә халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә ҡарата ғорурланыу тойғоһон тағы ла көсәйтеп ебәрәсәк.




КӨНАУАЗ

## АУЫРЛЫҠТАР КИЛЕР ҘӘ КИТЕР...

**"Макдоналдс", "KFC", тағы әллә күпме сит илдәрҙең тиҙ ҡабымлыҡ үҙәктәренең ябылыуына иң шатланған кеше мин булғанмындыр. Сөнки республикабыҙҙың баш ҡалаһында "Ҡунаҡһарай" урынлашҡан ерҙә шуларҙың ҡолас йәйеп сауҙа итеүенә ризаһыҙлыҡ белдереп, заманында матбуғат баҫмаларында сығыш та яһаным. Ләкин... ҡолаҡ һалыусы ла булманы. "Ҡунаҡһарай" бит баш ҡалабыҙҙың тарихи бер мөйөшө, милли мөхит үҙәге. Унда үҙебеҙҙең ризыҡтар - бишбармаҡ, ваҡ бәлеш, айран, буҙа, ҡымыҙ, бал, сәк-сәк, тағы әллә күпме ризыҡтар баш ҡалаға килгән ҡунаҡтарға тәҡдим ителергә тейеш. Ә бында Америка хот-догы, һәр төрлө бургерҙар.**

(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).

БАШ ҠАЛАМ

## САФ ҺАУАЛЫ САУҠАЛЫҠ



**Өфө - миллионлы ҡала. Бөгөнгө көндә теүәл нисә миллион халыҡ иҫәпләнәлер, аныҡ әйтә алмайым, ләкин рәсми һандан тыш, баш ҡалабыҙҙа тағы ла әллә күпме халыҡ йәшәүенә иманым камил. Уларҙың төрлө милләтле, төрлө диндә булыуына, ғөрөф-ғәҙәттәре һәм йәшәү рәүеше бер-береһенән айырылып тороуға ҡарамаҫтан, барыһын да һыйындырған ҡала ул тау башында балҡыусы Өфө. Һәр кемгә баш ҡалала нәҡ үҙе йәшәгән район, урын оҡшайҙыр, моғайын. Минең дә шулай. Ике тиҫтәнән артыҡ йәшәгән "Йәшел сауҡалыҡ" районын ташлап, бер ҡайҙа ла күсәсәгем юҡ.**

Ҡайһы берәүҙәр "Йәшел сауҡалыҡ"ты МВД мәктәбе, Президент ҡунаҡханаһы тирәһе генә тип уйлап хаталана. Беҙҙең райондың биләмәһе ҙур ғына һәм унда "Ихлас" мәсете, билдәле шифахана, лимонарий, ботаник баҡса, ВДНХ-ЭКСПО һәм башҡа күп төрлө ойошма һәм предприятиелар урынлашҡан. Баҙарҙарыбыҙ гөрләп эшләп тора, кинотеатрыбыҙ бар һәм төп ғорурлығыбыҙ - Башҡортостан урмансылары исемендәге парк (Парк имени Лесоводов). Шулай уҡ республика кимәлендә мөһим булған дауаханалар ҙа нәҡ беҙҙә. Ғөмүмән, "йоҡо" районы тип атап йөрөтһәләр ҙә, бында йәшәү өсөн бөтә уңайлыҡтар ҙа бар. Эшләйем тигән кешегә эш урындары ла етерлек.

Шулай ҙа беҙҙең райондың төп үҙенсәлеге һәм өҫтөнлөгө өҫтөбөҙгә ауырға торғандай ҙур һәм ҡуйы урмандарыбыҙ. Йәшеллеккә бәйләнеп килеүсе йәшәү өсөн мөһим тағы бер фактор - таҙа экология. Шулай уҡ сәнәғәт предприятиеларынан да алыҫтабыҙ. Тағы ла беҙҙең район аша ҙур трафиклы трасса үтмәүе лә отошло. Һәм, иң мөһиме, үҙәккә яҡынбыҙ.

Шулай ҙа башҡа райондарҙағы кеүек үк, беҙҙә лә етешһеҙлектәр бар. Ул да булһа транспорт мәсьәләһенең киҫкен тороуы. Йәмәғәт транспорты күберәк йөрөһә ине, тигән теләгебеҙ, дөрөҫөн әйткәндә, бөтә Өфө халҡыныҡы менән берүктер. Шулай уҡ күп ҡатлы йорттар эргәһендә машина ҡуйыу урындарының әҙ булыуы. Ҡышҡы ҡарлы-буранлы миҙгелдә Софья Перовская, Кувыкин, Мөбәрәков урамдары тығын ҡапҡанына эләгә.

Парктарыбыҙ, урмандарыбыҙ булыуының кире яғы ла бар, ҡыҙғанысҡа күрә. Көндәр йылыныу менән урман байрам итергә яратыусылар менән тула, машиналар һаны бермә-бер арта, улар яҡындағы магазиндарға иҫереп килеп, урындағылар менән йыш эләгешеп китә.

Балалар майҙансыҡтарының әҙ булыуы, юлдарҙың ремонт көтөүе, ҡышын йорт алдарын, юлдарҙы көрт баҫыуы, тротуарҙарҙың боҙлауыҡҡа әйләнеүе һәм башҡа ошондай мәсьәләләр башҡа райондарға ла хас һәм уларға айырым туҡталып тормайым.

**Рәшиҙә ХӘЛИТОВА.**

12+

✔ *Балаларҙы, йәштәрҙе ылыҡтырырлыҡ үҙебеҙҙең милли кафеларыбыҙ булһа, бөләкәй саҡтарынан уларҙа милли рух тәрбиәләп, өҫтәлдәребеҙгә милли аштар ҡуйып өйрәтһәк, бәлки, ул тиклем сит ризыҡтарға әүрәмәҫтәр ине.*



ӘЙТЕМ ӘЙТТЕМ!

# АҠСА ИҪӘП ЯРАТА



**Ысынлап та, аҡса иҫәп ярата. Таныш әйтем. Аҡса булһын ғына, иҫәпләй белербеҙ, тиер берәүҙәр. Юҡ аҡсаның ниен иҫәпләйһең, тип, ҡаршы төшәр икенселәр. Ошоға тиклем иҫәпһеҙ йәшәнек, артабан да бирешмәсбеҙ, тиер өсөнсөләр. Шулай ҙа...**

Аҡса тураһындағы был мәҡәләне бер дини гәзиттә уҡығайным. Оло йәштәге бер ханым яҙғайны уны. Хаттың йөкмәткеһе шунан ғибәрәт: хаҡлы ялдағы был хат авторы ғүмере буйы аҡсаға йәлсей алмай йыҙалаған. Бер аҡһаҡал бабайҙың тормош аҡылы уның аҡсаға ҡарата мөнәсәбәтен үҙгәрткән һәм ул аҡсанан өҙөлмәй, өҙөлмәй генә түгел, етеш йәшәй башлаған. "Был аҡылды үҙем генә ҡулланмайым, балаларыма ла өйрәттем, улар ҙа хәҙер аҡсаһыҙ ултырмай", тип тамамланғайны был хат.

Үҙем ҡулланып ҡараманым был кәңәште, сөнки "Быға тиклем иҫәпләмәнем, артабан дә бирешмәсмен", тигәндәрҙән ары китә алмам, ахыры. Шулай ҙа һеҙгә тәҡдим итмәксемен, ни өсөн тигәндә, телде ҡыҫып тора, етмәһә, кемгәләр файҙаһы тейеүе ихтимал. Бәхәсһеҙ, махсус финанс белемлеләрҙе көндәҙ шәм яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың. Әлеге кәңәште ҡулланыу өсөн артыҡ белем кәрәкмәй, бары шарттарын дөрөҫ үтәргә кәрәк. Әлбиттә, бәйып та китмәҫһегеҙ, был турала һүҙ ҙә юҡ, аҡсаһыҙ ҙа булмаҫһығыҙ - бар әтнәкәһе шунда. Аҡсанан өҙөлмәгәндәр ҙә ҡулланып ҡараһын, сөнки был тормош аҡылының дини тәрбиәһе бик мөһим, һаран булмаҫҡа өйрәтә ул бәгзе берәүҙәрҙе.

Тыңлағыҙ, дөрөҫөрәге, уҡығыҙ, аҡыл һатам: күпмегә алдым, шул хаҡҡа бирәм! Оҡшаһа, артабан бушлай таратығыҙ.

Мәҫәлән, һеҙ, баяғы хат авторы кеүек, хаҡлы ялдағы кеше икән, ти. Айлыҡ килемегеҙ ун мең һум тәшкил итә. Һаныу еңел булһын өсөн шулай түңәрәкләп алайыҡ. Был сумма йөҙ процент була бит инде. Шуның алтмыш процентын, беҙҙең осраҡта алты меңен, ай буйы тотоноу өсөн айырып алабыҙ. Күп аҡса түгел, әлбиттә, әммә ошо аҡсаны еткерергә кәрәк. Кредиттарым, фатир өсөн түләүҙәрем, бурыстарым, тип иламағыҙ - был кәңәш илаҡтар, бурыстарынан ҡотола алмай йәшәгәндәр, ғөмүмән, төшөнкөлөккә бирелгәндәр, өмөтһеҙҙәр өсөн түгел. Артабан ҡалған аҡсаның егерме процентын - ике меңде алыҫҡараҡ йәшерәбеҙ. Был - үҫеш өсөн һаҡлана торған аҡса нисбәте. Ҡалған егерме процентын (иң мөһиме ошо!) мохтаждарға хәйер итеп таратырға кәрәк. Ошо шартты үтәмәйенсә, ни хикмәт менәндер, был кәңәштең фәтеүәһе булмай. Киләһе айҙа ун мең һум килемгә йәшереп ҡуйған ике меңде ҡушабыҙ ҙа, шуның алтмыш процентын - ете мең ике йөҙ һум аҡсаны ай буйы тотоноуға айырып алабыҙ. Һиҙәһегеҙме, үткән айҙа алты мең ине, был айҙа уның күләме артты. Ул ғына түгел, үҫеш өсөн ҡалдырылған аҡса менән хәйер итеп бирәсәк аҡсаның дә күләме артты. Тимәк, был айҙа һеҙ үткән айға ҡарағанда йомартыраҡ буласаҡһығыҙ. Собханаллаһ! Артабан ай һайын тотона торған аҡса ла, үҫеш аҡсаһы ла, хәйер аҡсаһы ла геометрик прогрессия буйынса үҫә барып, ярты йылдан ике тапҡырға күбәйәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡыҙыҡтырғыс тәҡдим, шулай бит? Ә ниңә ҡулланмаҫҡа, һәр хәлдә, хәйерсе хәленә төшмәҫһегеҙ, киреһенсә, үҙегеҙ ай һайын күберәк хәйер биреп, сауаплы йәшәрһегеҙ.**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

КӨНАУАЗ

# АУЫРЛЫҠТАР КИЛЕР ҘӘ КИТЕР...



**(Башы 1-се биттә).**

### Күпмеһе һаулығын юғалтҡандыр

Тап шул төбәктә бөтә юғары уҡыу йорттары урынлашҡан - Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡорт дәүләт медицина университеты, Башҡорт дәүләт авиация техник университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты, Өфө дәүләт сәнғәт институты... Башҡа техникум һәм колледждар. Күпме студенттар шундағы бер файҙаһы булмаған ризыҡтарҙы ашап, һаулығын ҡаҡшатҡан. Әллә нисә тапҡыр ҡулланып, көйөп, янып бөткән майҙарҙа ҡыҙҙырылған иттәрен (унда ит булыуы ла шикле әле!) булка кисәгенә ҡыҫтырып, төрлө тәмләткестәр (унда ла нимә булыуын белерлек түгел) һалып, аппетитты ҡуҙғата торған еҫтәр сығарып һатҡан нәмәләрен (ризыҡ тип әйтергә тел дә әйләнмәй) ашап, киләсәк быуын вәкиленең ғүмере күпмегә ҡыҫҡарғандыр - бер Аллаһ Тәғәләгә билдәле.

"Тәмләткес" тигәндән, унда бәйләлек тыуҙыра торған матдәләр һалынмайҙыр тип кем гарантия бирә ала? Юғиһә, йәштәр ҙә, балалар ҙа, хатта урта йәштәргәге кешеләрҙең дә шунда атлығып тороуын нисек аңлатырға? Балаларының тыуған көндәрен "Макдоналдс"та үткәреүсе атай-әсәйҙәр ҙә ишәйеп китте һуңғы ваҡытта. Йәштәр ҙә шунда ваҡыт уҙғарырға ярата. Әгәр ҙә балаларҙы, йәштәрҙе ылыҡтырырлыҡ үҙебеҙҙең милли кафеларыбыҙ булһа, бөләкәй саҡтарынан уларҙа милли рух тәрбиәләп, тәбиғи ризыҡтарыбыҙҙың файҙаһы тураһында һөйләп кенә түгел, өҫтәлдәребеҙгә ҡуйып өйрәтһәк, бәлки, ул тиклем сит ризыҡтарға әүрәмәҫтәр ине. Америка кешеләре ашаған ризыҡтарҙың химикаттарҙан ғына тороуына бер миҫал. Бәлки, был уйлап сығарылғандыр, әммә уны ла матбуғатта уҡығайным. Имештер ҙә, ҡәберҙә ятҡан мәйетте тикшерер өсөн асып ҡарағалар, уға бер нәмә лә булмаған, тере килеш кеүек ята, ти. Химикаттар менән генә туҡланған кешенең мәйете шулай консервацияланған...

### "Кока-кола"мы, ҡымыҙмы?

"Кока-кола", "пепси-кола" компанияларының китеүе лә хәйерле. Тағы бер миҫал килтерәм. Уныһын да байтаҡ йылдар элек үҙәк гәзиттә уҡығайным. Тәжрибә үткәреү өсөндәр, күрәһең, кока-колалы һауытҡа ит киҫәген һалалар ҙа, күпмелер ваҡытҡа һыуыҡтыҫҡа ҡуйып торалар. Бер нисә сәғәттән һуң ҡараһалар, иттән бер нәмә лә ҡалмаған, кока-кола уны "ашап" бөтөрөп, ниндәйҙер шыйыҡ массаға әйләндергән. Шунан күҙ алдына килтерегеҙ инде: кока-кола эскән кешенең ашҡаҙаны менән нимә була? Әйткәндәй, ул кока-кола тигәндәре машиналарҙың майлы алмаш өлөштәрен йыуырға хәтәр шәп ти водителдәр.

Санкцияларға ҡарата ла фекеремде еткергем килә. Ябай халыҡ өсөн, пенсиянан пенсияға йәшәгән өлкән кешеләргә, башкөлләй кредитка, ипотекаға батҡан йәштәргә, әлбиттә, бик ауыр. Рәсәй халҡы хәҙер нисә йыл инде санкция шарттарында йәшәй. Шуға, ниндәйҙер иммунитет та барлыҡҡа килгәндер. Әммә һәр нәмәнең насар яғы булған кеүек, яҡшы яғы ла бар. Ниһайәт, илебеҙ эске иҡтисадыбыҙға, сәнәғәткә, ауыл хужалығына, башҡа өлкәләргә иғтибарҙы нығыраҡ йүнәлтер. Халыҡ та, бәлки, ҡайһы бер нәмәләргә мөнәсәбәтен үҙгәртер.

### Шәкәрме, балмы?

Һуңғы ваҡытта шау-шыу ҡуптарған шәкәрҙе генә алайыҡ. Бер ҡараһаң, унһыҙ ҙа йәшәп була ла баһа. Баҡсала үҫкән бөтә емеш-еләктәребеҙҙән ҡаҡ ҡойоп, ҡыш буйы ашарлыҡ татлы ла, файҙалы ла, иң мөһиме, тәбиғи ризыҡ әҙерләргә була. Туңдырғысҡа ла һалып ҡуйырға мөмкин. "Ә компот яһағанда?" - тиер кемдер. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипованың балан, ҡыҙыл, ҡара миләш, әнәлек, гөлйемеш кеүек витаминлы емештәрҙән ҡыштҡылыҡҡа һуттар әҙерләп ҡуйғанын беләм. Шәкәрһеҙ! Быуа тигән! Табынында һыйланған булды. Шәкәр урынына бал ҡулланырға ла мөмкин бит: сәйгә лә, компотҡа ла, бәлешкә лә.

Шәкәр күп, етерлек, тиҙәр. Ә ниңә шулай булғас сит илдәрҙән ҡамыш шәкәре алына? Уның әллә татлылығы әҙ, әллә башҡа сәбәптәре бар, хужабикәләр ҡайнатма яһағанда ризыҡтарының тиҙ әсеүенә, боҙолоуына, ҡапҡастарының атылыуына зарлана. Мин тағы бер нәмәгә аптырайым: ниңә беҙ үҙебеҙҙә етештерелгән сөгөлдөр шәкәрен сит илгә сығарабыҙ ҙа, үҙебеҙ уҡ шуларҙан ҡамыш шәкәре алабыҙ? Тәүҙә үҙ халҡыңдың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү мөһимерәк түгелме ни? Йәнә Мәләүеҙәге шәкәр заводының ябылыуы ла аңлашылмай. Күпме ара үтеп, көньяҡ районлар шәкәр сөгөлдөрөн Раевка һәм Шишмә заводтарына тапшырырға мәжбүр.

### Мәсеттә - Ҡытай түбәтәйе

1981 йылда республикабыҙҙың бер төркөм интеллигенция вәкилдәре - яҙыусылар, журналистар, архитектор, рәссам, композитор, артистар Вьетнамға сәйәхәткә барҙыҡ. "Киске Өфө" гәзитенең баш мө-хәррире Гөлфиә Янбаева менән мин дә бар инем ул делегация составында. Ундағы ауыр тормошҡа, халыҡтың мохтажлыҡта йәшәүенә аптырап ҡайттыҡ. Күпмелер ваҡыт үткәйне, әлеге шул туҡһанынсы йылдар башында, беҙҙә Вьетнам баҙарҙары барлыҡҡа килә башланы. Ҡасан ғына тамағы дөгөгә туймаған, өҫтө кейемгә бөтәймәгән халыҡ ете диңгеҙ аша тигәндәй беҙгә килеп етеп, үҙ тауарҙарын һатып торһонсо әле! Бер аҙҙан ҡытайҙар ҙа килеп тулды. Улар инде бөтә донъяны яуланы. Ҡайҙа барма - ҡытай тауары. Мәсеткә инһәң - Ҡытай түбәтәйҙәре, тәсбихтәре, магазиндарҙа - ҡытай һа-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Пандемия башланғандан бирле Башҡортостанда яңы коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 282 823 осрағы теркәлгән. Һуңғы тәүлектә 331 осраҡ раҫланған. 15 апрелгә 129 пациент стационарҙа дауалана. Республикала 1929 сирле табиптар күҙәтеүендә. Бөтәһе 275 191 кеше дауаханалан сығарылған, 516-һы - һуңғы тәүлектә. Башҡортостанда 2 428 855 кеше вакцинация үткән.

✔Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров Мәләүеҙә Рус география йәмғиәтенең республика бүлексәһе ултырышын ойоштороу пландары менән уртаҡлашты. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, 2021 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың Рус география йәмғиәте илдә иң яҡшы бүлексәләр рейтингында 10-сы баҫҡыстан 2-сегә күтәрелде.

✔Республикаға идара итеү үҙәгендә уҙған оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Республикаһының Гәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров: "Башгидрометүҙәк һәм экспертар баһаһы буйынса, ташҡындың иң юғары кимәлен апрелдең өсөнсө декадаһында көтәбеҙ, - тине.- Шунан һуң һыу тулыһынса кәмей башлай". Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "кешеләрҙе бөлә менән яңғыҙ ҡалдырмаҫ" өсөн хәлде күҙәтеп барырға ҡушты.

✔18 апрелдә Башҡортостанда йыл һайын уҙғарылған "Сәләмәтлек поезы" акцияһы башлана. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Динара Еникеева хәбәр итте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына райондарға килгән медицина хеҙмәткәрҙәренә шарттар булдырыу үтенесе менән мөрәжәғәт итте.

✔Ил Президенты әүҙем тормош позицияһы һәм ҙур уңыштарға өлгәшкән граждандарҙы Рәсәй Федерацияһының дәүләт наградалары менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Билдәләнеүенсә, Башҡорт дәүләт медицина университеты ординаторҙары Илдар Рәйес улы Әпсәләмов, Рүзил Зөфәр улы Ғәлиев һәм Руслан Рәмил улы Фәхретдинов, шулай уҡ Өфөнөң 21-се дауаханаһының бүлек мөдире Рәмилә Зәйнулла ҡыҙы Батраева Лука Ҡрымский миҙалы менән бүләкләнде.

уыт-һабаһы, баҙарҙа - кейемдәре. Бер ҡытайҙан ҡыҙыҡһынып һораным: "Һеҙ мосолмандар түгел, башҡа дин тотаһығыҙ, нисек шулай доғалар яҙылған мосолман һауыт-һабалары, түбәтәй һәм башҡа нәмәләр етештерәһегеҙ?" Ул миңә былай яуап бирҙе: "Беҙҙең Ҡытайҙың бер провинцияһында курдтар йәшәй, бөтә мосолман әйберҙәрен ана улар етештерә".

Ә ниңә беҙ ваҡ-ваҡ кәсепселек менән үҙебеҙ шөғөлләнмәйбеҙ? Йәнә бала сағыма әйләнеп ҡайтам. Ауылға ваҡыты-ваҡыты менән ҡыҫҡартмаһы бабай килә торғайны. Иҫке сепрәктәр ҙә, һөйәктәр ҙә йыя ине. Урынына малайҙар - ҡармаҡ, ҡыҙҙар - таraҡ, өлкән апайҙар, инәйҙәр үҙҙәренә булавка, энә кеүек кәрәк-яраҡ ала. Хәҙер тарағы ла, булавкаһы ла, ҡармағы ла - "Маде ин Чина". Хужалыҡтағы бөтә кәрәк нәмә Ҡытайҙыҡы. Бар донъяны Ҡытай ғына тәьмин итә кеүек. Урман ишелеп торған республикала йүкә йыуғысын да, массажерҙарын да, һеперткеләрен дә үҙебеҙҙә етештереп булмаймы ни? Беҙ уларға ағас һатабыҙ, ә ҡытайҙар беҙгә... теш соҡоғос таяҡсаларына хәтлем эшләп кире ебәрә.

## Кемдәр алыр улар урынын?

Кемдәр килер "Макдоналдс"-тарға алмашҡа? Үҙебеҙҙең "Кунаҡһарай"ға кемдәр хужа булыр? Аграр университет янындағы "KFC" урынын кем биләр? Бөгөн беҙгә шулар хаҡында уйларға кәрәк. Әйткәндәй, хәләл кафелар ҙа бар ул баш ҡалабыҙҙа. Тик, нишләптер, уларҙың барыһы ла Урта Азия халыҡтарыныҡы. Быйтыр "Ихлас" мәсетендә ураҙа айында ифтар ашы әҙерләгән үзбәктәр менән танышырға тура килде. Ирле-ҡатынлылар Өфөлә дүрт кафе асҡандар. Минең аптырауыма улар: "Әгәр теләһәгеҙ, һеҙ ҙә аса алаһығыҙ, беҙ ярҙам итәбеҙ", - тип ғәрләндерҙеләр ҙә. Ситтән килгән кешеләр ерле халыҡҡа "ярҙам" тәҡдим итә! Быны нисек аңларға? Улар беҙҙә хужа булып бөткәндәр түгелме? Шул уҡ ваҡытта мин бер таныш ҡатындың нисә йылдар буйына шундай кафе аса алмай йөрөгәненә шаһитмын. Алдына мең кәртәләр ҡуялар. Һәр этапта әллә күпме ҡаршылыҡтарҙы енер өсөн әллә күпме аҡсаһын бөтөрөп, ахыр сиктә, ҡул һелтәп ҡуйҙы...

Уйлай башлаһаң, уйылып китерлек. Был өлкәләр беҙҙең кеүек ябай халыҡ ҡына аңларлыҡ түгелдер инде. Әммә санкцияларға ҡарата ниндәйҙер яуап саралары күрелһен ине. Бәләкәй эшҡыуарлыҡтар үҫешһен. Кәсепселек менән шөғөлләнеүселәр артһын. Уларға дәүләт ярҙамы күрһәтелһен, мең кәртәләр ҡоролмаһын. Мәҫәлән, Башҡортостанда туризмды үҫтереү, сит илдәрҙән килгән кешеләргә ауыл туризмын күрһәтеү хаҡында ла күп йылдар элек "Башҡортостан" гәзитендә яҙып сыҡҡайным. "Кайҙа һин, Баштур агентлығы?" тигән мәҡәлә 1-се биттә баҫылғайны. Ул да ваҡытында иғтибарһыҙ ҡалды. Күрәһең, мәле етмәгән булғандыр. Етәкселектең алышыныуын, ярашлы ҡарарҙарҙың ҡабул ителеүен көткәндәр. Мин яҙғанса, сит ил кешеләренә ауылда бер нисә көн йәшәп, бесән сабып, утын ярып, мунса инеп, ҡымыҙ эсеп, һыйыр һауып, һөт ризыҡтарының нисек әҙерләнеүен күреп, һыбай йөрөп, тирмәлә ҡуныу - үҙе бер экзотика ла баһа! Шөкөр, хәҙер был йәһәттән нимәләр эшләнә башланы. Беҙгә үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрергә, үҙебеҙҙе башҡаларға танытырға өйрәнергә кәрәк. Санкциялар килер ҙә китер, беҙгә артабан йәшәргә. Бөгөн һәр кемде шул борсоһон.

Зәһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.

ИҒТИБАР!

# КЕМ АЛЫҠ?



**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле бара. Халыҡ гәзит-журнал-китап уҡыуҙан төңөлә бара, тип уфтанылһа ла, дуҫтарыбыҙҙы бөтөнләй уҡ юғалтып бөтмәгәнбеҙ икәненә ышанабыҙ. Бар әле гәзит һүҙен үҙ иткәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. Шулай итеп, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 757 һум 80 тингә яҙылып ҡуйһағыҙ, беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ.**

- Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ.
- Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен.
- **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ, тимәксебеҙ.
- **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.
- Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

МӨХӘРРИРИӘТ.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҮҘЕҢ ЕТЕШТЕРҺӘҢ...

## борсолорға сәбәп булмаҫ

**Илдәге һуңғы осорҙа барған ваҡиғалар айҡанлы борсолорға сәбәп юҡ, тиһәләр ҙә, киң мәғлүмәт сараларынан, социаль селтәрҙәрҙән күренеүенсә, халыҡ араһында күпләп аҙыҡ-түлек запасын йыйған кешеләр һаман бар әле. Бигерәк тә ҡалала йәшәүселәр был тәңгәлдәге ҡытлыҡтан ҡурҡа. Бында, әлбиттә, социаль селтәрҙәрҙә таралған фейктарҙың роле лә ҙурҙыр. Ҡайһы бер тауарҙарға ихтыяж күбәйеү сәбәпле, магазин кәштәләре бер ни тиклем бушап ҡалыуы хаҡында һатыусылар ҙа йәшермәй.**

Ҡала ерендә йәшәгәндәрҙең, ауылдыҡылар менән сағыштырғанда, ҡурҡыуға сәбәптәре лә бар кеүек. Сөнки улар бөтә нәмәне тиерлек һатып ала. Ауылда баҡса үҫтергәндәрҙең, ҡош-ҡорт, мал-тыуар тотҡандарҙың хәле яҡшыраҡ, тип уйлайым. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мал аҫрағанға ҡарағанда һатып алыу арзаныраҡҡа төшә, тип, һарайындағы малын бөтөргәндәр ҙә, картуф-баҡса ултыртмағандар ҙа күбәйҙе шул ауылдарҙа. Эш буйынса йыш ҡына Күгәрсен, Көйөргәҙе районлары буйлап йөрөргә тура килә. Ҡайһы бер ауылдарҙа картуф баҡсаларының яртыһын сүп баҫып ултырыуын осратҡаным бар. Элек бер түгел, ике баҡса сәселә ине. Уның береһен үҙенең ғаиләһенә ашарға ҡалдырһалар, икенсеһен йә магазинға тапшырырҙар ине, йә урамда онға, башҡа кәрәк-яраҡҡа алмаштырып алып ҡалалар йәки һаталар ине. Барыбер файҙаһын күрәләр ине. Хәҙер хаҡы юҡ, эше ауыр, тип, үҙҙәренә ашарға ғына сәсәләр ҙә, етмәй ҡалһа, һатып алып ашайҙар. Ысынлап та, картуф, һуған, кишерҙең хаҡы быйылғы санкцияларға тиклем ҡыйбат булманы. Әммә арзан тип, әллә ҡайҙан килгән йәшелсәне ашап ултырғансы, үҙең сәсеп үҫтергәнгә етмәй бит. Мин үҙем "ер аяғы ер башы" ерҙән килтерелгән картуфтың бер түмән тоймайым.

Шулай уҡ күптәр магазиндағыға алданып, ҡош-ҡорт тотмаҫҡа өйрәнеп алды. Һыйыр, кәзә-һарыҡ көтөүҙәренең дә йылдан-йыл кәмеүенә иғтибар итмәгән кеше юҡтыр. Әлбиттә, ҡаҙ-өйрәк аҫрар, мал тотор өсөн еме лә, ҡатнаш аҙығы ла кәрәк. Уларына һуңғы йылдарҙа йөйҙең ҡоро килеүе сәбәпле хаҡтар артты. Уларҙы һатып алырға мөмкинлеге булмағандар ҙа барҙыр. Өҫтәүенә, ауыл ерендәгеләрҙең дә күбеһе хәҙер ситкә йөрөп эшләй. Ауылда эш булмағас, ҡалаға, район үҙәгенә йөрөп эшләгәндәр ҙә күп. Тапҡанының яртыһы юлына китеп торһа ла риза улар. Ситкә йөрөп эшләгәс, бесән әҙерләргә лә форсат таба алмайҙарҙыр. Һатып алам тиһә, мал аҙығының хаҡы ла йылдан-йыл арта бара.

Әммә, нисек кенә булмаһын, быйыл, минеңсә, баҡса ултыртыусылар ҙа, ҡош-ҡорт аҫраусылар ҙа, мал-тыуарын ишәйтеүселәр ҙә күбәйер, тип уйлайым. Юғиһә, быйыл картуфтың хаҡы банан, әфлисун кеүек сит илдән килтерелгән емештеке менән тиңләшә яҙҙы бит. Үҙебеҙгә етештерергә, үҫтерергә һәм үҙебеҙ етештергәнде үҙебеҙгә ҡулланырға өйрәнергә кәрәк. Ул сағында аҙыҡ-түлек ҡытлығынан ҡурҡырға ла, борсолорға ла сәбәп булмаясаҡ.

Әйткәндәй, күптән түгел интернет селтәрендә ауыл ерендә йәшәүселәрҙең колхоз-совхоздарҙы тергеҙеү тураһында фекере таралып киткәйне. Хужалыҡтың был төрөн иҡтисадҡа индереү, ысынлап та, ҡамасауламаҫ ине ул. Берҙән, ул әлегә, дөрөҫөрәге, урта һәм оло быуын кешеләре иҫән булғанда, яңынан та түгел, сөнки дөйөм хужалыҡ алып барыу тәжрибәһе бар. Әлбиттә, унда, элекке кеүек, береһен дә көсләп индерергә түгел. Һәр кем үҙ теләге һәм ирке менән инергә һәм уларға фермерҙар менән бер тиң шарттарҙа эшләргә мөмкинлек бирелергә тейеш. Нисек кенә булмаһын, ауыл хужалығы тармағын үҫтереү бик мөһим. Бигерәк тә бөгөнгә баҙар шарттарында.

Шәфҡәт ЯРЫШЕВ.
Көйөргәҙе районы Яманһары ауылы.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓25 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған тантаналы кисә була. "Һөйләшһәләр әгәр туған телдә, телгә алыр улар мине лә..." тип аталған кисәлә республиканың билдәле артистары башҡарыуында Рәми Ғариповтың шиғырҙары һәм поэмалары яңғырай. Кисәнең режиссеры - Сулпан Асҡарова, сценарий авторы - Гөлсәсәк Саламатова. Киске сәғәт 7-лә башлана.

✓Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы май байрамдарына бәйле өҫтәмә ял көндәре тураһында иҫкә төшөрҙө. 1 майҙа Рәсәйҙә - Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы, ә 9 майҙа - Еңеү көнө. Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт кодексына ярашлы, улар ял тип иҫәпләнә. Башҡортостанда быйыл 2 майҙа дин тотҡан мосолмандар Ураҙа байрамын билдәләй. Шулай итеп, Башҡортостанда йәшәүселәр биш көнлөк эш аҙнаһы булғанда 30 апрелдә, 1, 2, 3, 4 һәм 7, 8, 9, 10 майҙа ял итә. Йома, 29 апрелдә һәм 6 майҙа, эш көнө ҡыҫҡармай.

✓Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында Фәрит Әхмәҙиевтың (авторҙашы Ольга Мусина) пьесаһы буйынса "Герой йондоҙо" спектакленең репетициялары бара. Спектакль легендар летчик-штурмовик, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арнала. Премьера 2022 йылдың 6-7 майында күрһәтелә.

✓Рәсәй Хөкүмәте башлығы Михаил Мишустин льготалы ипотека ставкаһын 12 процентҡа еткереү тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. 23 мартта Рәсәй президенты Владимир Путин хөкүмәтең льготалы ипотека ставкаһын 12 процентҡа тиклем (элек 7 процент ине) күтәреү идеяһын хупланы. Дәүләт башлығы фекеренсә, былдай осраҡта ла ул баҙарҙағыға ҡарағанда күпкә түбәнерәк була.

✓Быйыл Октябрьский музыка училищеһында капиталь ремонт тамамлана һәм Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында, Хәсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында, "Нур" татар театрында ремонт эштәре башлана. Был турала Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында премьер-министр Андрей Назаров белдерҙе. 2022 йылда биш сәнғәт мәктәбендә, өс музейҙа һәм 14 ауыл мәҙәниәт йортонда ремонт эштәрен финанслау ҡаралған.

ҠЫҪҠАСА

# БӘЛӘНЕ ИҪКӘРТЕҮ ӨСӨН...

✓ **Синоптиктар фаразынса, быйыл тотош илдә аномаль эҫе һәм ҡоро һауа торошо көтөлә.** Апрелдә һауа шарттары урман янғындары сығыуға килтереүе мөмкин, тип белдерҙеләр Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығында. Янғын хәүефе миҙгеле алдынан ведомство быйыл тәүге тапҡыр урман биләмәләрен һауанан тикшереп сыҡты. Яҡынса 1,6 мең саҡрымлыҡ маршрут Башҡортостандың көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш өлөшө аша үтте. Башҡортостан Республикаһы Урман янғындарын иҫкәртеү һәм һүндереү үҙәгененң летчик-күҙәтеүсеһе Урал Риянов хәбәр итеүенсә, тигеҙлектәрҙә ҡар иреп бөткән, Бөрйән, Йылайыр, Белорет һәм Учалы районлары тауҙарында ҡар бар әле.

✓ **2019 йылда Башҡортостан Башлығы башланғысы менән бизнес-шерифтар институты асылғайны.** Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы республика Хөкүмәтендә бизнес-шерифтар менән осрашты. Иҡтисадҡа ярҙам саралары һәм санкция баҫымы бәйле яңы саҡырыуҙар тикшерелде. "Алдыбыҙға ҡуйылған төп бурыс - эшҡыуарлыҡҡа булышлыҡ, инвестициялар йәлеп итеү. Һеҙ ошо йүнәлеш менән генә шөғөлләнһен өсөн муниципалитет башлыҡтарынан һеҙгә башҡа эш йөкмәтмәүҙәрен һораным. Сөнки был - ғәйәт ҙур эш, - тине Радий Хәбиров осрашыуҙа. - Ике йыл ярым үткәс, бизнес-шерифтар институты эшләй тип әйтә алам. Республикала эшҡыуарлыҡҡа ярҙам күрһәтеү, уны яҡлау эше менән шөғөлләнгән шәп команда барлыҡҡа килде. Беҙҙең тәжрибәне федераль кимәлдә лә юғары баһаланылар". Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бизнес-шерифтарҙы укытыуҙы ойошторорға тәкдим итте.

✓ **Башҡорт дәүләт университеты ректоры вазифаһын башҡарыусы итеп Вадим Захаров тәғәйенләнде. Юғары уҡыу йортоноң ғилми советы ултырышында Рәсәйҙең фән һәм юғары белем биреү министры урынбаҫары Пётр Кучеренко һәм Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев яңы етәксе менән таныштырҙы.** "Республиканың юғары уҡыу йорттары, айырыуса Башҡорт дәүләт университеты - Волга буйы федераль округында ла, ғөмүмән, Рәсәйҙә лә иң ҙурҙарының береһе. Бөгөн Вадим Петровичты Захаровты Башҡорт дәүләт университеты ректоры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләү - республикала яңы ҙур университет булдырыу буйынса етди эштең дауамы ул, - тине Пётр Кучеренко. - Башҡорт дәүләт университеты һәм республиканың башҡа юғары уҡыу йорттары "Өҫтөнлөк 2030" федераль программаһында ҡатнаша. Алда - университет кампусы төҙөлөшөнөң күләмле проектын ғәмәлгә ашырыу".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҢ ҘУР ҠАҘАНЫШЫБЫҘ...



**Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет ултырышы булып үтте. Уның эшендә Совет ағзалары, республикалағы традицион диндәрҙең, йәмәғәт ойошмаларының, милли-мәҙәни берләшмәләрҙең етәкселәре, муниципалитеттар башлыҡтары ҡатнашты.**

Йыйылыусыларҙы тәбрикләп, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың көслө яҡтарының береһе булып милләт һәм конфессия-ара дуҫлыҡ, татыулыҡ һәм ихтирам тороуын билдәләне. "Өс йыл элек Валдай клубы барышында "Рәсәй һәм Ислам донъяһы" сессияһында "түҙемлелек" тигәнде аңлатҡан "толерантлыҡ" һүҙен телмәребеҙҙән алып ташлап, быуаттар буйына һыналған "халыҡтар дуҫлығы" тигән фразаны ҡалдырырға тәкдим иткәйнем, - тине Радий Фәрит улы. - Беҙҙә башҡорттар, рустар, татарҙар, мариҙар, сыуаштар, христиандар, мосолмандар, иудейҙар бала саҡтан дуҫ йәшәй. Бергә үҫәләр, уҡыйҙар, эшләйҙәр, өйләнешәләр, ҡатнаш ғаилә ҡоралар. Кәрәк ваҡытта, ата-олаталарылай, бергәләшеп Ватанын һаҡлайҙар. Рәсәй көүек күп милләтле ил өсөн халыҡтар һәм диндәр араһындағы дуҫлыҡ - илдең һәм уның граждандарының бөтөнлөгөнөң, ҡеүәтенең тәүшарты. Тыныслыҡты һаҡлауға һуңғы йылдарҙа алып барылған милли сәйәсәт менән берҙәм идара итеү, аныҡлап әйткәндә, Милләттәр эше буйынса федераль агентлыҡ һәм 2025 йылға тиклем Рәсәйҙең дәүләт милли сәйәсәте стратегияһын ҡабул итеү ярҙам итә. Республикалағы милләт-ара тыныслыҡ - быуаттар буйына йәшәп килгән традиция ғына түгел, ул бөгөн барлыҡ кимәлдәге властың, йәмәғәт берләшмәләренең грамоталы милли-мәҙәни сәйәсәт алып барыу һөҙөмтәһе. Артабан да дәүләт программалары, грант ярҙамы, милли матбуғатты, мәғарифты үҫтереү аша этномәҙәни һәм тел күп төрлөлөгөн һаҡлауға ярҙам итәсәкбеҙ. Был беҙҙең иң ҙур ҡаҙанышыбыҙ..."

Артабан сығыш яһаусылар бөгөн берләшеүҙең бигерәк тә мөһим булыуын билдәләне. Мәҙәниәт министрлығының Гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәге директоры урынбаҫары Розалия Яппарова төбәктең дәүләт милли сәйәсәте концепцияһы проекты менән таныштырҙы. "Документ этномәҙәни һәм тел күп төрлөлөгөн һаҡлау нигеҙендә дөйөм Рәсәй берҙәйлеген нығытыу мәсьәләһен хәл итә, - тип аңлатты ул. - Һәм ул декларатив түгел, ә ҡулланма булып тора". Ултырыш һуңында Радий Хәбиров йыйылыусыларға республикала милләт һәм конфессия-ара татыулыҡты нығытыуға индергән өлөшө өсөн рәхмәт белдерҙе һәм дәүләт наградалары тапшырҙы.

# ЭНЕРГИЯ - ҠОЯШТАН



**"Экология һәм технологиялар" күргәҙмәһен һәм экофорумды асыу барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Полиэф" акционерҙар йәмғиәтенең ҡояш электр станцияһын сафҡа индереүгә старт бирҙе.**

Электр станцияһының проект ҡеүәте яҡынса 4,9 МВт була, был иһә республикабыҙҙағы ҡояш электр станциялары ҡеүәтенән 7,1 процент. Проектҡа инвестициялар - 280 миллион һумдан ашыу. "Полиэф"тағы ҡояш батареялары проекты етештереүҙең углеродлы эҙен кәметергә һәм предприятиеның энергия балансында "йәшел" электр энергияһы өлөшөн ярайһы уҡ арттырырға тейеш. "Беҙҙә Хәйбулла, Көйөргәҙе, Ейәнсура, Бөрйән, Стәрлебаш һәм Ғафури райондарында алты ҡояш электр станцияһы эшләй. 2022 йылда Баймаҡ районында һәм Ағиҙелдә тағы ике ҡояш электр станцияһын файҙаланыуға тапшырырға йыйынабыҙ. Ошо мөһим йүнәлеште үҫтереү буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә бишенсе урынды биләй", - тип билдәләне Радий Хәбиров.



"Полиэф" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Евгений Семенько һүҙҙәренсә, 8 гектарҙан ашыу майҙанда 10 800 юғары һөҙөмтәле монокристаллик ике яҡлы фотоэлектрик элементтар ҡуйылған. Проекты ғәмәлгә ашырғанда башҡа компанияларҙың тәжрибәһе файҙаланылған. "Һигеҙ гектар ҡояш панелдәре хатта йыһандан күренә. Ә йыһан технологиялары беҙҙең тормошта ҡулланылыш таба - спутник һәм орбита станциялары атрибуттарынан улар бөтә донъяла заманса предприятиелар ҡорамалдарының бер өлөшөнә әүерелә. Ошондай яңы проекттарҙы тормошҡа ашырыу етештереүҙең экологик яҡтан таҙалығын һәм һөҙөмтәлелеген арттырыуға булыша", - тине "Полиэф"тың генераль директоры. Станцияла яҡынса 1000 МВт сәғәт экологик таҙа электр энергияһы эшләп сығарылған, был CO2 ҡалдыҡтарын 384 тоннаға кәметеүгә тиң.

# ҺАБАНДА ҺАЙРАШАЛАР...



**Быйыл Башҡортостанда 2 миллион гектар майҙанда яҙғы сәсеү эштәрен башҡарыу бурысы тора. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.**

Был аҙнала республиканың көньяғындағы ҡайһы бер предприятиелар күп йыллыҡ үләндәрҙе туҡландырыуға төштө, Әбйәлил районында дым ҡаплатыуға тотондолар, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында. Ведомствола быйылғы сәсеү кампанияһы мәсьәләләрен тикшерҙеләр. Эксперт мәғлүмәттәре буйынса, бер нисә районда ғына тупраҡтағы дым уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән юғары, күпселектә - тупраҡтағы дым кәрәккәнгә ҡарағанда аҙыраҡ, шуға күрә дым һаҡлау эштәрен мөмкин тиклем иртәрәк башҡарырға кәрәк. Сәсеү кампанияһын финанс яҡтан тәьмин итеүгә килгәндә, федераль бюджет Башҡортостанға льготалы кредиттар өсөн 760 миллион һум аҡса бүлде. Был сумма, төп ставканың кәмеүен иҫәпкә алып, республика аграрийҙары ихтыяжын ябырға ярҙам итергә тейеш. Сәсеү осоронда сит ил техникаһына оператив ремонт талап ителеүе ихтимал. Предприятиеларға Башҡортостандың Ремонтлау-хеҙмәтләндереү предприятиелары ассоциацияһы менән үҙ-ара эш итергә ҡушылды. Унда запас частарҙы һәм агрегаттарҙы ремонтлау, әҙерләү йәки һатып алыу менән тиҙ арала ярҙам итергә әҙерҙәр.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев сираттағы оператив кәңәшмәлә беренсе урынбаҫары менән таныштырҙы. "Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ мәсьәләләре һәм Өфөнө төҙөкләндереү минең өсөн беренсе урында тора. Шуға күрә беренсе урынбаҫар вазифаһына кандидатураны ентекле һайланым, - тип яҙҙы ҡала мэры. - Сергей Петрович Кожевниковты яңы вазифаға тәғәйенләнеүе менән ҡотлайым! Абруйлы һәм компетентлы етәксе, эше менән хеҙмәттәштәренең һәм халыҡтың ышанысын яуланы. Сергей Петрович 2015 йылдан Калинин районы хакимиәте башлығы булып эшләне, идара итеү тәжрибәһенә эйә".

✓ 15-16 апрелдә Өфөлә "Торатау" конгресс-холлында Башҡортостан Республикаһы баҡсасыларының беренсе "SMART-баҡсасы" форумы үткәрелә. Вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илдус Фәзрахманов һүҙҙәренсә, форумда 500-гә яҡын кеше ҡатнаша. Улар коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәттәре рәйестәре, муниципалитет вәкилдәре. Форум көндәрендә Конгресс-холл янындағы майҙанда орлоҡтар, баҡса инвентарҙары, үҫентеләр һәм ашламалар күргәҙмә-йәрминкәһе ойошторола.

✓ 10 апрелдә өфөләр Ағиҙел йылғаһында боҙ китә башлауын һөкланып күҙәтте. Әйткәндәй, йылға боҙҙан фаразланған ваҡытта әрселде. Ҡала халҡының күбеһе яҙҙың үҙ хоҡуҡтарына инеүен символлаштырған тәбиғәт күренешен фотоға һәм видеоға төшөрҙө. Башгидрометүҙәк мәғлүмәттәре буйынса, 11 апрелгә Өфө сиктәрендә йылғалар кимәле түбәндәгесә: Ағиҙел йылғаһы бөгөн - 171 сантиметр (+42 сантиметр); Өфө йылғаһы (Шакша биҫтәһе янында) - 120 сантиметр (+9 см); Дим йылғаһы (Бочкаревка) - 235 сантиметр (+11 сантиметр).

✓ 11 апрелдән "Өфө-Арена" стадионы алдындағы майҙанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 77 йыллығы уңайынан хәрби парадтың репетициялары башланды. Хәбәр ителеүенсә, репетициялар апрель аҙағына тиклем аҙна һайын, шулай уҡ 5 һәм 7 майҙа Октябрь проспектында уҙғарыла. Быңдай парадтарҙың тәүгеһендә 1500 кеше ҡатнашты, улар араһында - Өфө территориаль гарнизонының 20 расчеты, федераль башҡарма власының республика органдары отрядтары, хәрби хәрәкәттәр ветерандары, кадеттар, курсанттар бар.

**БАШИНФОРМ"**
**материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ТАҒЫ ЛА ЙӘШЕЛЕРӘК БУЛЫР!



**Йыл һайын ошо матур миҙгелдә ҡала хакимиәтендә көн ҡаҙағына һуҡҡан тема ниндәй, беләһегеҙме? Эйе, юлдағы соҡорҙарҙы ямау, сөнки ҡышын тигеҙ һымаҡ күренгән юлдар, ҡар иреү менән соҡор-саҡырға әйләнә лә ҡуя. Йыл һайын бер үк проблема ҡабатлана. Ҡала хакимиәтендә был аҙнала үткән оператив кәңәшмәлә Өфөлә коммуналь хеҙмәттәрҙең көн һайын тәүлек әйләнәһенә юлдарға ямау һалыуы билдәле булды. Йыл башынан алып 5 меңдән ашыу квадрат метр майҙанда барлығы 845 тонна асфальт-бетон ҡатнашмаһы һалынған.**



Бынан бер ай элек автомобиль һәм ихата юлдарындағы соҡорҙар цифрлаштырыла башлағайны. Бөгөн был һан 3284-кә еткән һәм улар буйынса эш алып барыла. Шулай уҡ хакимиәттең рәсми сайтында юлдарҙағы соҡорҙарҙы ремонтлауҙың интерактив картаһы эшләй, унда ҡайҙа ремонт кәрәклеге буйынса мөрәжәғәттәр ҡабул ителә. Кәңәшмә барышы ваҡытына уларҙың 54 проценты үтәлгән булыуы билдәләнде.

Көндәр йылытҡас, баш ҡалала торлаҡ фондын капиталь ремонтлау буйынса ла эштәр башлана. Быйыл 337 күп фатирлы йорт ремонт көтә. 2014 йылдан алып Өфөлә барлығы 2707 йорт ремонтланған, уларҙың ҡайһы берҙәрендә бер нисә төр ремонт эше башҡарылған. Ә барлығы ошо осорҙа 13,5 миллиард һумлыҡ 4283 төр эш тормошҡа ашырылған. Капиталь ремонтты планлаштырғанда лифттар ҙа алмаштырыла. Бөгөнгә барлығы 615 йортта 1637 лифт алмаштырылған, быйыл иһә 182 йортта 604 лифтты алмаштырыу планлаштырыла. 47 йортта подъездарҙы комплекслы ремонтлау күҙаллана. Был эш 1 октябргә тиклем тамамланырға тейеш. Ғөмүмән, йорттарға капиталь ремонт үткәреү программаһы 2052 йылға тиклем оҙайтыла.

Баш ҡалала халыҡтың уңайлы тормошо хаҡында ғына хәстәрлек күрелмәй, граждандарҙың, шул иҫәптән йәштәрҙең дә, сәләмәтлеге һәр саҡ иғтибар үҙәгендә. Быны 6-24 йәш арауығындағы 12546 уҡыусы һәм студенттың яртыһының тиерлек ГТО нормаларын алтын, көмөш һәм бронза значогына тапшырыуы ла раҫлай. Баш ҡалала ГТО нормативтарын дүрт тестлау үҙәгендә тапшырырға мөмкин. Шулай уҡ улар күсмә саралар ҙа уҙғара һәм, һөҙөмтәлә, киң күләм ҡатнашыусы йәлеп итеүгә өлгәшә. Шуға ҡарамаҫтан, ГТО нормаларын тапшырған студенттар өлөшө 20 процент ҡына тәшкил итә. Әлеге ваҡытта юғары уҡыу йорттары етәкселеге менән студенттарҙы күпләп йәлеп итеү һәм уларҙы дәртләндереү буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла. Мәҫәлән, башҡа төбәктәрҙә ГТО нормативын алтын билдәгә тапшырыусыларға юғары стипендия түләнә, уларға ҙур спорт сараларына - футбол, волейбол матчтарына билеттар бирелә. Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев ГТО тапшырыуҙа уҡыусылар һәм студенттар менән генә сикләнмәй, муниципаль хеҙмәткәрҙәрҙе лә әүҙемерәк йәлеп итергә ҡушты.

Һәм тағы. Өфө мэры Ратмир Мәүлиев 23 апрелдә Башҡортостандың баш ҡалаһында "Йәшел Башҡортостан" экологик акцияһы башланыуы хаҡында әйтте. "Беҙҙә 18-гә яҡын тематик аллея булдырыла. 800 ағас һәм 500 ҡыуаҡ - бөтәһе өс меңдән ашыу ағас ултыртыу күҙаллана", - тип билдәләне Ратмир Мәүлиев. Бынан тыш, Өфө Мәғлүмәт технологиялары үҙәге акцияға арналған махсус сайт булдырҙы. Унда ағас ултыртыу картаһы, тоҡомдар тураһында мәғлүмәт, тәрбиәләү ҡағиҙәләре, мобиль ҡушымта бар". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров аллеялар ултыртҡанда бейек ағастарға айырыуса ҙур иғтибар бүлергә ҡушты. Бынан алда "Башинформ" Өфөлә медицина хеҙмәткәрҙәренә хөрмәт билдәһе итеп "Аҡ сәскәләр" аллеяһын асырға йыйыныуҙарын хәбәр иткәйне.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ДАРЫУҘАР

**Рәсәй хөкүмәте ҡарары менән йәшәү өсөн мөһим дарыуҙар исемлеге киңәйтелде.**

Уға коронавирус менән ауырығандарҙы дауалауҙа ҡулланылған молнупиравир препараты инде. Вирусҡа ҡаршы фавипиравирға өҫтәмә дарыу формалары - онтаҡ, концентрат, лиофилизат өҫтәлгән. Әлеге ваҡытта иң кәрәкле препараттар исемлегендә - бөтәһе 800-ҙән ашыу дарыу. Бындай препараттарға хаҡты дәүләт көйләй, уларҙы бушлай медицина ярҙамы күрһәтеү дәүләт гарантиялары программаһы сиктәрендә ҡулланалар, исемлектәге препараттар дауалаған табиптың рецебы буйынса ташлама менән файҙаланыусыларға бушлай бирелә.

## ӘРМЕГӘ КИТӘЛӘР...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин 2022 йылдың 1 апреленән 15 июленә тиклем хәрби хеҙмәткә саҡырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы.**

"2022 йылдың 1 апреленән 15 июленә тиклем запаста булмаған һәм 1998 йылдың 28 мартындағы "Хәрби бурыс һәм хәрби хеҙмәт тураһында" федераль законға ярашлы хәрби хеҙмәткә алынырға тейешле 18-27 йәшлек 134 500 гражданды хәрби хеҙмәткә саҡырырға", - тиелә указда. Бынан тыш, указға ярашлы, хеҙмәт итеү ваҡыты тамамланған һалдаттар, матростар, сержанттар һәм старшиналар хәрби хеҙмәттән азат ителергә тейеш.

*ҠЫҪҠАСА*

## ИМТИХАНДАР...

✓ **2022 йылда сығарылыш уҡыусылары араһында иң популяр Берҙәм дәүләт имтиханы фәндәре билдәле булды.** Башҡортостан Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыусыларҙың 37,3 проценты йәмғиәтте өйрәнеү фәнен һайлаған. Ғәҙәттәгесә, информатикаға һәм мәғлүмәт-коммуникация технологияларына (23 процент), биологияға (20,3 процент), физикаға (19,7 процент), химияға (17,9 процент), тарихҡа (12,3 процент ) ҡыҙыҡһыныу ҙур. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ун беренсе класс уҡыусылары урта дөйөм белем тураһында аттестат алыу өсөн рус теленән һәм математиканан имтихан тапшырырға тейеш. Уҡыусылар база йәки профиль кимәлендәге математиканы һайларға мөмкин. 2022 йылда берҙәм дәүләт имтиханы өс осорҙа уҙғарыла: ваҡытынан алда - 21 марттан 15 апрелгә тиклем; төп - 26 майҙан 2 июлгә тиклем; өҫтәмә - 5-20 сентябрҙә.

✓ **Яҙғы сессияла Дәүләт Думаһына әсәлек капиталының 5 процентҡа тиклемен ҡулаҡса менән биреү тураһындағы закон проектын индереүҙәре ихтимал.** Был турала "Известия" гәзите закон проектын әҙерләүселәрҙең береһе, Дәүләт Думаһының Ғаилә, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар мәсьәләләре комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Татьяна Буцкаяға һылтанып хәбәр итте. Аҡсаны ғаиләләргә бер тапҡыр биреү күҙҙә тотола, тине Буцкая. "Йыш ҡына Әсәлек капиталының төп йүнәлештәр өсөн файҙаланылмай ҡалған аҡсаһы йылдар буйына һаҡлана. Халыҡтың закон буйынса ҡаралғандың барыһын да алыу мөмкинлеге булырға тейеш",- тип хәбәр итте ул баҫмаға. Түләнгән аҡса ғаилә ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн тәғәйенләнгән тауарҙар һәм хеҙмәттәр һатып алыу өсөн сығымдарҙы ҡаплауға тотонолор тип күҙҙә тотола, Хөкүмәткә уларҙың исемлеген раҫларға тәҡдим ителә. Компенсация капиталдың бер өлөшөн төп йүнәлештәрҙең береһенә файҙаланған ғаиләләргә генә түләнә.

✓ **Үҙгәртелгән телефон һандарын ҡулланып, сит илдән спам-шылтыратыуҙарҙың яңы төрөнә ялыуҙар һаны артҡан.** Был хаҡта Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәт хәбәр итә. Ведомство "большая четверка" (мобиль элемтә операторҙары) менән берлектә абоненттың ризалығынан тыш килгән рекламаға ялыу биреү өсөн махсус форма булдырыу өҫтөндә эшләй. Тиҙҙән ул Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәт һәм элемтә операторҙары сайтында барлыҡҡа киләсәк. Унын ярҙамында абонент спам-шылтыратыуҙарға ялыу ҡалдыра һәм үҙенең операторынан яуап алырға мөмкин. Теләмәгән рекламаны 72 сәғәт эсендә блокка ҡуйырға мөмкин булыуы көтөлә. Әлеге ваҡытта элемтәнең ике операторы, атап әйткәндә "МТС" һәм "МегаФон" үҙ абоненттарына роботлаштырылған шылтыратыуҙы индереп, спам-хәбәрҙәрҙе бушлай блокка ҡуйыу сервисын тәҡдим итә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан баҫымы

Энәлек артериаль ҡан быҫымын яйға һалырға ярҙам итә. Халыҡ дауаһында уны түбән ҡан баҫымын да, юғарыһын да йүнәлтеү өсөн ҡулланалар. Ул ҡан баҫымын һәм йөрәк эшмәкәрлеген, коронар тамырҙар торошон яҡшырта.

❖ Бер балғалаҡ энәлек емешенә (йәки япрағы һәм ботаҡтарына) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Дүрткә бүлеп көн дауамында эсергә.

❖ 1 балғалаҡ энәлек сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Төнәтергә. Дүрткә бүлеп көн дауамында эсеп бөтөргә.

### Инфаркттан һуң

**Инфаркт кисергәндән һуң һауығып китеү өсөн йөрәккә файҙалы өс төрлө төнәтмә бар.**

❖ Энәлек емеше, ҡыҙыл туҡранбаш сәскәһе, фенхель орлоғо, һары мәтрүшкә үләне, аҡ тал ҡайырыһын бер тигеҙ алып, ваҡларға һәм бутарға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп талғын утта 10 минут быҡтырырға. 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланғандан һуң икенсе төнәтмәгә күсергә.

❖ Энәлек сәскәһе, ҡандала үләне (донник), боланут, мелисса, еркәүек (таволға) үләндәре, валериана тамырһабағын бер тигеҙ алып ваҡларға һәм бутарға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп талғын утта 10 минут тоторға. 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөп алырға. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә. Был рәүешле 2 ай дауаланғандан һуң өсөнсө төнәтмәгә күсергә.

❖ Дегәнәк тамыры, ҡыҙыл туҡранбаш сәскәһе, бәпембә тамыры, ҡыҙыл миләш емеше, еркәүек үләнен тигеҙ өлөштә алып ваҡларға һәм ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 10 минут тоторға һәм 1 сәғәт төнәтергә. Шунан стакан тулы булһын өсөн ҡайнар һыу өҫтәп ҡойорға. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә. Ике ай дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Төньяҡ-көнсығышта ла буфеттар шулай уҡ биҙәлгән. Ҡайһы берҙә орнаментта хайуандар донъяһынан күренештәр сағылыш тапҡан. Дыуан-Мәсетленән Әхмәҙиева Фәрхиәнең боронғо буфетының өҫкө өлөшөндәге түңәрәкләнеп торған урта тар таҡтаға ике яҡтан уйымдар яһалған һәм быяла ситтәре буйлап ҡыҫан мөйөштәр рәүешендә ҡырҡылған. Түбәһе ҡанаттарын йәйеп осорға йыйынған ҡоштарҙы хәтерләтә: уртала ҙуры һәм ике яҡ ситтә вағыраҡтар.



*Семәрле буфеттың өҫкө өлөшө. Мәсетле районының Дыуан-Мәсетле ауылы, 1977 й. Автор фотоһы*

XX быуаттың 30-сы йылдарында һәм Бөйөк Ватан һуғышынан һуң ҡулдан эшләнгән йорт йыһаздары күбәйгән. Был осорға уртаҡ милли стиль дә барлыҡҡа килә. Этник үҙенсәлектәр ни бары теге йәки был биҙәктәргә өҫтөнлөк биреүҙә генә сағылыш тапҡан.

Буфеттарҙа һауыт-һаба һәм аҙыҡ-түлек һаҡланған. Быялалы өҫкө яғынан сәй сервиздары, вазалар һәм рюмкалар күренеп торған. Кинерәк булған аҫты тартмаларҙан һәм ҡапҡаслы һикенән ғибәрәт булған. XX быуат уртаһында эшләнгән әйберҙәр - юғары сәнғәт һәм оҫталыҡ өлгөһө. Иртә осорҙағы мебелдәрҙән улар күп төрлө ҡырып яһалған деталдәре менән айырылған: колонка һәм ярым колонкаларҙан, буфеттың быялалы ҡаштәһе өсөн ҡалын аҫтар, пирамида кеүек осланып тамамланған баштар. Ҡапҡас ҡыҫандарын, тартмаларын ҡабарынҡы һырлау ярҙамында биҙәгәндәр. Шулай уҡ өсмөйөш уйымдар, кәкерсәктәр, диагональ һыҙаттар менән һыҙылған тура дүртмөйөштәр, ҡайһы бер осраҡта ярым түңәрәктәр, өсәрле япраҡ рәүешендәге орнаменттар киң таралған. Буфеттарҙы күп осраҡта буяғандар, лак яғылған. Ерлекте буяғанда һоро, һары, зәңгәр төҫ ҡулланылған. Ҡайһы бер осраҡта ҡағып беркетелгән һәм айырымланып торған деталдәр ҡыҙыл, күк төҫкә буялған. Бер-береһенә яҡын зәңгәр һәм күк, асыҡ һәм ҡара һоро төҫтәр бергә ҡулланылған.



*Семәрле кәштәнең өҫтө. Ейәнсура районы Юнай ауылы, 1970 йыл. Автор һүрәте*

Башҡа кәсептәр менән бергә һандыҡтар эшләү оҫталығы ла үҫешкән. Борондан алып ауыл кешеһенең көнкүрешендә һандыҡтар иң кәрәкле әйберҙәр рәтендә. Унда кейем һәм башҡа әйберҙәр һаҡланған, бирнә йыйғандар. Һандыҡ менән килен әйберен кейәү өйөнә оҙатҡандар. Йыш ҡына һандыҡты баҙарҙан һатып алғандар, сөнки уны эшләү өсөн ағас һәм тимер менән дә яҡшы эш итә белеү кәрәк булған. Һандыҡты ҡалай менән ҡаплағандар, тимер менән нығытҡандар. Ағас һандыҡтар йәки бер аҙ ҡалай ҡағылған һандыҡтарҙы башҡорт ауылдарында ла эшләгәндәр. Ҡалайға кәкерсәктәр рәүешендәге орнамент сүкелгән. Арҡыс-торҡос ҡағылған тар ғына ҡалай киҫәктәре ҡыя шаҡмаҡ, дүртмөйөш фигураларҙан торған биҙәк хасил иткән.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# КЕШЕНЕ АРТЫҠ МАҠТАМАҪҠАМЫ?

**Гәзитебеҙҙең сираттағы бер һанында Наилә Хәмбәлиеваның "Һәр кем үҙенсә" тип аталған бер кәлимә фекере баҫылып сыҡҡайны. Башҡорттарҙың тыйнаҡлығы хаҡында ине ул. Хатта берәүҙе артыҡ маҡтай башлаһалар, маҡтаусы кешене "тыйнаҡһыҙ рәүештә" тыйыусылар ҙа табылыуы тураһында бер аҙ фәлсәфәләп, ошо хаҡта гәзит уҡыусының фекер әйтеүен дә һораған автор...**



Бик мөһим мәсьәләне күтәргән Наилә һылыу. Башҡорттарҙың тыйнаҡлығын мин дә электән тоям. Хатта бала сағымда ла шуға иғтибар итә торғайным. Мин 5 - 7 синыфтарҙа уҡыған күрше ауыл мәктәбендә башҡорт һәм урыҫ кластары булды. Үҙем башҡорт синыфында уҡыным. Башҡорт ҡыҙҙарының ғына түгел, хатта малайҙарҙың да үтә баҫалҡы булыуы хәтеремдә уйылып ҡалған. Урыҫ синыфындағы балалар беҙгә өндәшһәләр, хатта ҡаушап ҡала торғайныҡ. Яңылышыраҡ яуап биреп, көлкөгә ҡалған ваҡыттар ҙа булманы түгел. Ике күрше ауыл малайҙарының шул мәктәп стадионында футбол уйнағанын ҡараған мәл иҫемдә. Бер урыҫ малайы (әлләә шаяртыу ниәте менән, әлләә ысынмылыр) минән: "За кого болеешь?"- тип һораны. Мин уның был һорауын, әлбиттә, аңлап етмәнем. Ахырҙа: "Мин ауырымайым", - тигән һымағыраҡ яуап бирҙем. Рәхәтләнеп минән көлгәндәрен хәтерләйем. Урыҫ балаларының ҡыйыулығына ла ғәжәпләнә торғайным. Ҡыҙҙарҙың уҡытыусы апайҙарҙы ҡултыҡлап алып, үҙҙәренең дуҫы һымаҡ күреп, ҡулдарын болғай-болғай иркенләп һөйләшеп йөрөүҙәре, ә малайҙарының тәнәфестә йә урамда булһа ла уҙ-ара нығ тауышланып аралашыуы беҙҙекенән айырыла ине шулай ҙа. Мин быны урыҫ телендә үҙебеҙҙең шыма һөйләшә алмауыбыҙ менән бәйләнем, әлбиттә. Ишетеүемсә, хәҙер балалар башҡорт синыфында уҡыһалар ҙа, урыҫса яҡшы һөйләшә. Шуға күрә лә мәктәптәребеҙҙә ундай айырмалыҡтар, бәлки, юҡтыр ҙа, тип уйлайым.

Тағы бер күҙәтеүем хаҡында әйтергә ниәтем. Мин хәрби табип булып хеҙмәт иткән дивизияла башҡа башҡорт офицерҙары ла бар ине. Күптәре үҙ балаларын туған теленә өйрәтмәгәне өсөн: "Нишләп балағыҙҙы башҡортса һөйләштермәйһегеҙ?", - тип һорағылағаным булды. Улар: "Беҙ бала саҡта мәктәптә урыҫ телен яҡшы белмәүебеҙ арҡаһында үҙебеҙҙе башҡаларҙан кәм тоя инек. Хәҙер, исмаһам, балаларыбыҙ урыҫса яҡшы һөйләшһен", - тигән һымағыраҡ яуап бирә торғайнылар. Әммә хатта урыҫ телле булыуҙарына ла ҡарамаҫтан, ошо кескәй генә милләттәштәрҙең дә барыбер бүтәндәрҙән айырылғаны һиҙелә ине. Урамда уйнап йөрөгән шул башҡорт балаларының баҫалҡылығын, сағыштырмаса баҙнатһыҙлығын күреп, ҡайһы берҙә йәлләп тә ала торғайным. Уларҙың башҡорт йөҙлө булыуы ғына түгел, ә әҙәплелеге барыбер күҙгә ташлана ине шул. Иғтибар итәм: балалар майҙансығында таусыҡта шыуып уйнаған кескәйҙәр араһында беҙҙең малайҙарыбыҙ түҙемле генә сират көтөп тороусан. Шуның менән файҙаланып, башҡа күптәрҙең етеҙ генә алға төшә һалып, сиратһыҙ үтеп китеүҙәрен дә күрәм. Бүтәндәрҙе алдарынан үткәреп тороусы "ҡараҡас" малайҙарҙы йәлләп, ҡайһы берҙә, хатта уларҙы етәкләп, иң алға алып барып та ҡуйғылаған мәлдәрем булды. Шуға күрәме, башҡорттоң үтә баҫалҡылығы, ай-һай, урыҫ телен насар белеүҙән генә түгелдер, тип уйлай башлайым бөгә ваҡыт.

Бәләкәй балаларыбыҙ ғына түгел, һалдат коллективында ла үҙебеҙҙең егеттәрҙең йыуашлығына йыш ҡына "эсем көйгәләй" торғайны. Ахырҙа, түҙмәй, уларҙы башҡа олораҡ һалдаттарҙан йөнтәслим яҡлаша башлаған мәлдәрем дә булманы түгел. Һалдат булып беҙҙең дивизияла хеҙмәт иткәндәр араһында райондаштарым, ауылдаштарым, хатта туғандарым да булды. Шул яҡташ һалдаттарыбыҙҙың күптәре хәҙер, моғайын, тормош ҡороп, илдә йәшәп яталыр. Бәлки, кемеһелер ошо гәзитте уҡып, иҫләп тә ултыралыр... Минең офицер булып шунда хеҙмәт итеп йөрөүемдә, хатта уларға ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булыуымды белә тороп та, берәй ауыр ваҡыттарында килеп мөрәжәғәт итергә ҡыймауҙарына үкенә инем. "Нишләп килмәйһең, госпиталгә һалып, ике-өс аҙнаға булһа ла ял бирер инем үҙеңә", - тип әйтһәм: "Мин ауырымайым да баһа", - тип кенә яуап биреүсе яҡташтарым әле булһа иҫемдә. Хатта яҡын ғына танышыңдың йә туғаныңдың улы булыуына ҡарамаҫтан, ике йыл буйы "Хәлил ағай", тип яныңа үҙе килмәгән ана шундай "тешекмә" (ҡапыл да асылып бармаусы кеше) егеттәребеҙгә ғәжәпләнә ла инем. Ә шулай ҙа, милләттәштәребеҙҙең бындай тыйнаҡлығы насар түгел тип һанайым. Башҡалар һымаҡ әрһеҙ булмауҙары ҡайсаҡ үкенес тойғоһо уятыуына ҡарамаҫтан, уларҙың ошо сифатын хатта гүзәл тип тә атар инем..

Халҡыбыҙҙың тағы бер ыңғай ягы - хистәрҙе йүгәнләй белеү. Наилә һылыу әйтмешләй, "бәйҙән ысҡынып китһәк, һуңынан үкенә лә беләбеҙ..." Күптәребеҙ, башҡалар менән аралашҡанда ысынлап та ыңғай йә кире хистәребеҙҙе йәшереп тота алабыҙ. Тура әйткән туғанына ярамай, тигән әйтем дә бар. Кешенең йөҙөн йыртып, уның етешһеҙлеген (хатта дөрөҫ булһа ла) туранан-тура күрһәтеүҙән тартыныу ҙа, милләттәштәребеҙҙең иң яҡшы һыҙаттарының береһе тип һанайым. Тап бына ошо сифатыбыҙ арҡаһында халыҡтар дуҫлығы буйынса Башҡортостаныбыҙ күптәргә өлгө булырлыҡ, тигән инаныуҙамын. Ҡайһы берҙә, шайтан үсеүсәһе арҡаһында, "сығырынан сығып", ташып барған уй-хистәреңде әйтеп һалғы ла килеп китә лә ул. Әммә үҙебеҙҙең асыуыбыҙҙы йүгәнләп алырға тырышабыҙ. Гәзиттә, ғаиләләрҙә башланған һәр ғауға, ыҙғыш-талаштар ҙә ир менән ҡатындың бер-береһенә дөрөҫлөктә "тура һалдырыуы" арҡаһында килеп сыға бит.

Автор ҡуҙғатҡан йәнә бер мәсьәлә - кемделер маҡтау хаҡында. "Маҡтауҙы ялағайлыҡҡа тиңләйбеҙ, йылы һүҙгә ваҡыт сарыф иткебеҙ килмәй", тип яҙа автор. Хаҡ һүҙҙәр! Халҡыбыҙҙың бына ошо яғы да тик хуплайым ғына. Мөхәммәт бәйғәмбәр с.ғ.с. ҙә кешене артыҡ маҡтауҙы ҡәтғи тыйған. "Әгәр һине берәү маҡтай башланы икән, уның күҙенә тупраҡ һип", тип әйткән хәҙис бар. Шулай уҡ "Мосолман кешеһенең үҙенең ҡәрҙәшен маҡтауы уның билен һындыра һуғыуға тиң", тип тә әйткән Рәсүлуллаһ. Әммә "маҡтарға ярамау" - бер-береңә тупаҫ мөнәсәбәттә булыуҙы аңлатмай, әлбиттә. "Йылы һүҙ йән аҙығы" тип әйтәләр халҡыбыҙҙа. Үҙ-ара тик яғымлы һүҙҙәр ярҙамында аралашыу мотлаҡ. Тик, әлеге әйтмешләй, маҡтауҙа хәттин ашыу тыйыла. Моғайын күптәрҙең күргәне барҙыр, һуңғы йылдарҙа ҡайһы бер юбилей кисәһендә кемделер "ергә лә төшөрмәй" маҡтап алып китеү ғәҙәткә инеп бара. Ныҡлап иғтибар итһәң, әлеге маҡталған кеше хатта уңайһыҙлана ла башлай...

Донъебеҙҙә артыҡ маҡтауҙы тыйыу күҙ тейеү менән дә бәйле булһа кәрәк. Берәүҙәр тик насар кешенең генә күҙе тейеүсән, тип һанай. Әммә, һине ысын яҡын күргән берәй туғаныңдың да (хатта атаәсәнең дә) күҙе тейеүе ихтимал. Шуның өсөн дә абайламайыраҡ, балаңа йә башҡа берәүгә һоҡланып йә иһә уны маҡтап ебәрһәң икән, "Бәрәкә-Ллаһу фи кә" (Аллаһ һиңә бәрәкәт бирһен) тип әйтеү кәрәк (онотоп китеп, килендәребеҙҙең береһен маҡтап гәзиткә яҙғас, унан: "Күҙ тейеүҙән ҡурҡам", тигән һымағыраҡ ризаһыҙлыҡ ишеттем һәм бәйғәмбәр с.ғ.с хәҙисенән алынған шул доғаны уҡып алдым. Был тарафтан хәҙер инде һағыраҡ булырға тырышам). Физик яҡтан нығ үҫешкән берәүҙең ярты биленә ҡәҙәре сисенгән күргән бер сәхәбә, һоҡланып, уны маҡтай башлаған. Шуны ишетеп торған Мөхәммәт с.ғ.с. маҡтаусыға: "Һин уға күҙ тигеҙҙең. Тиҙ генә ғөсөл ҡойон..."- тип әйткән. Шул һыу менән маҡталған кешегә лә ғөсөл алырға ҡушҡан. Ир кешенең тәненә һоҡланыуҙан да күҙ тейгәс, бөгөнгә көндә ярым сисенгән гүзәл заттарыбыҙ хаҡында әйтеп тә тораһы юҡ бит! "Өммәтемдең күпселеге күҙ тейеү арҡаһында һәләк була", тип әйткән хәҙис тә бар. Уйламағанда берәү ниндәйҙер сиргә һабышып китә, әммә үҙенә күҙ тейеү арҡаһында икәне уның башына ла килмәй. Күрһәң, халҡыбыҙ борон бына ошо өлкәлә лә ғилемлерәк булғандыр...

Шулай уҡ йыш ҡына телгә алынған ҡыҙҙарыбыҙҙың "ҡырыҫлығы", ир-аттарыбыҙҙың "наҙға һаранлығы" булыуын да халҡыбыҙҙың әүәлдән килгән ҡиммәттәренең береһенәр тип һанайым. Тик гүзәлдәребеҙгә ҡарата ҡулланылған "ҡырыҫ" һүҙен "әҙәпле"гә алыштырыр инем мин. Ят ир-аттарға асылып бармау нәфис заттарыбыҙҙың гүзәл бер үҙенсәлеге ул. Ә ир-егеттәребеҙҙең үҙҙәрен маҡтауға ҡапыл да "ирей" һалмауы, шулай уҡ, башҡаларҙы кәрәккән-кәрәкмәгәндә "күтәрмәләп" тә бармауы уларҙың "туң" булыуын аңлатмай. Мосолмандарға хас булырға тейешле ошондай яҡшы сифаттарҙы бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с "хөснүл-холоҡ" (урыҫса - прекрасный нрав) тип атаған...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ *Амударъя буйында Пашхурд ауылынан алыҫ түгел урынлашҡан Байсун ҡалаһы районында үзбәктәрҙең айынны ырыуы вариҫтары йәшәй, ошо ырыу атамаһы башҡорт әйеләре исеменә тура килеүе беленеп тора.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҺАЛЙОТ, ТЕРҺӘК, ҺЕҢРӘН, БӘКӘТИН, ҺЫРҘЫ, ШУРАН-

## оло башҡорт иленең кесе ырыуҙары улар



Шулай уҡ боронғо башҡорт ырыуҙарынан булған һеңрән ырыуы хаҡында ла тарихи сығанаҡтар күп түгел. Уларҙың ата-бабаларының рус дәүләтенә тиклемге тарихын, нисек итеп башҡорт халҡы составына ҡушылыуын аныҡлаусы мәғлүмәттәр юҡ тиерлек. Ҡайһы бер тарихи документтарҙа һеңрәндәрҙе урман халыҡтарынан булған коми-зыряндар менән тиңләү сағылыш тапҡан. Күрәһең, рус дәүләте чиновниктарына башҡортса яңғыраған "һеңрән" атамаһы русса "сенгрян/сенрян" формаһында яҙылып алынып, уларға билдәле булған "зырян" атамаһы менән бер иш тойолғандыр. Шуға күрә XVII - XVIII быуаттарға ҡараған рәсми документтарҙа һеңрән ырыуы башҡорттары "сырянцы", йә иһә "зырянцы", тип теркәлә. Ырымбурҙағы рус администрацияһы чиновнигы, тарихсы П.И. Рычков та үҙенең яҙмаларында Ҡаҙан даруғаһында "Зирян юрты" тип билдәләнгән башҡорт биләмәһен иҫкә ала. Этнограф Р.Ғ. Кузеев быны заманында Тарихи Башҡортостандың көнбайышында, Ыҡ йылғаһы буйында һәм унан көньяҡтараҡ һеңрән ауылдары булыуы менән аңлата. Шул уҡ Ыҡ йылғаһы буйында Һеңрән (Сынгряново) исемле ауыл әле лә бар. Күрәһең, был яҡтарҙа әле ошо территорияла тороп ҡалып, башҡа ырыуҙар составына ҡушылып киткән боронғо һеңрән ырыуы вариҫтары йәшәй. Р.Ғ. Кузеев билдәләүенсә, коми-зыряндарҙы башҡорт һеңрәндәре менән бутау бары тик лингвистик аңлашылмаусанлыҡ арҡаһында ғына килеп сыҡҡан. Коми халҡы иһә үҙен "зырян" тип тә атамай: уларҙың үҙ атамалары "коми-войтыр" һәм "коми-морт" рәүешендә әйтелә. Зырян атамаһы ситтән бирелеп, экзоним булып һанала. Бында тағы ла бер фактҡа иғтибар итеү фарыз: коми-зыряндарҙан бөтөнләйгә ситтә көн иткән тамъян ырыуы башҡорттарында һеңрән исемле ара (аймаҡ) булыуы билдәле.

Бәғзе бер дәлилдәргә таянып, Р.Ғ. Кузеев түбәндәге һығымталарға килә: "Ҡарамаҡта булған материал һеңрән ырыуы тарихында ошондай моменттарҙы дәлилле тип иҫәпләргә мөмкинлек бирә:

а) һеңрәндәрҙең ата-бабаларының тәү төйәге Бәләбәй ҡалҡыулығында һәм көньяҡ-көнбайыш Урал алдында була, бында уларҙың XX быуат баштарына тиклем боронғо ырыу атамаһын һаҡлап ҡала алған ырыуҙаштары йәшәй; б) һеңрәндәр көньяҡ-көнбайыш Урал алды территорияһында ҡатай һәм һалйоттар килгәндән күпкә алдараҡ йәшәгән һәм, моғайын, боронғо башҡорт ҡәбиләләре менән ҡатышҡан. Тамъяндарҙың һеңрән этнонимияһы һәм, бәлки, һеңрән атамаһының морфологик төҙөлөшө ошо бәйләнештең эҙемтәһе булып торалыр; в) XIII - XIV быуаттарҙа һеңрәндәр төньяҡҡа һәм төньяҡ-көнсығышҡа табан йүнәлтелгән оло хәрәкәткә ҡушылып китә. Ул заманда көслө булған ҡатайҙар һәм һалйоттар йоғонтоһо аҫтында ҡалып, күсеп китеү барышында улар хәрәкәт иткәнсә - көньяҡ-көнбайыш Башҡортостандан төньяҡ-көнсығышҡа табан булған маршрутты ҡабатлай. Етерлек тиклем материал булмағанлыҡтан, һеңрәндәрҙең ата-бабаларының төркиләшкән уғырҙарҙан йә иһә Бөгөлмә ҡалҡыулығының һәм уның периферияһының сармат-аландарынан, йә булмаһа сығыштары менән үк бөрйәндәрҙе, үҫәргәндәрҙе, тамъяндарҙы, түңгәүерҙәрҙе һәм башҡа боронғо башҡорт ҡәбиләләрен тыуҙырған ҡатмарлы, әммә башлыса төрки донъянан икәнлекте асыҡлап булмай".

Себер даруғаһы башҡорттары биләгән аҫаба ерҙәрҙә заманында бәкәтин этнонимы менән аталған ҡәүем була, рус хакимиәте документтарында ошо исемдәге олоҫ та теркәлә. Бәкәтин ырыуының килеп сығышы менән бәйле сығанаҡтар юҡҡа иҫәп, әммә ошо ырыуҙы нигеҙләүсе төп бабаның исеме Әйләләр шәжәрәһендә сағылыш тапҡан, ул - Бәкатун. Әлбиттә, башҡорт шәжәрәләрендә ҡан-ҡәрҙәшлекте хупләу, дөйөм башҡорт берҙәмлеген нығытыу мәсьәләһе һәр саҡта ла мөһим урын биләгән. Шул уҡ легендар Бәкатун байтаҡ ҡына башҡорт ырыу-ҡәүемдәренең төп бабалары исемлегенә индерелгән. Мәғрифәтсе, дин белгесе, яҙыусы Тажетдин Ялсығол (1768 - 1838) үҙенең "Тарих нама-и булгар" исемле әҫәрендә ошо хаҡта бына нисек яҙған (иҫке төрки яҙмаһында бирелә): "Бу Иштәкдән чуҡ уғланлар улды. Түб йорты Аму-Дарйасында ирде. Олуғ уғлы Тамйан, андан кечесе Үсәргәндүр, андан кечесе Күбәләк, андан кече Бәкатун, андан кечесе Сарт, андан кечесе Тырнаклы, андан кечесе Түбәләс, андан кече Дувандур. Бу халайыҡларның хәбәр бирмәге анларның нәселенәндүр. Әммә бу Иштәк уғланларындан безгә баба Бәкатундур. Әммә бу Бәкатун ғайәт үфкәлү адәм ирде. Йерне ташлаб бәләд шимал тарафуна баруб, Миач дарйасына килде. Анда мәҡам әйләб, туҡсан йыл ғүмер әйләде. Ануң уғланлары чуҡ улды. Олуғ уғлы Әйледүр, андан кечесе Йурми, андан кечесе Байлар, андан кечесе Байҡы, андан кечесе Ирәктә, андан кечесе Салджут. Бунлар һәр бересе шаһ улуб, атраф ғаләмә йәйелделәр. Халайыҡларның хәбәр бирмәге анларның нәселенәндүр. Безгә түб баба олуғ уғлы Әйледүр. Әммә Бәкатун насрани динендә иде".

XIX быуатта киң таралыу тапҡан тәүарих жанрындағы китаптарҙа, башлыса, шәжәрәләргә ҙур иғтибар бирелә, ырыуҙар шәжәрәләренә индерелгән боронғо, күп осраҡта легендар булған шәхестәр барса башҡортҡа ҡарата уртаҡ баба, тип ҡарала. Шул уҡ легендар Иштәк бер үк ваҡытта бәғзе бер төрки халыҡтарында башҡорттарҙың экзонимы (ситтән бирелгән атамаһы) сифатында ҡулланыла. Бәкатундың Иштәк улы булыуы ошо бабанан таралған ырыуҙарҙың боронғолоғона ишара.

Тажетдин Ялсығол тарафынан халыҡҡа еткерелгән башҡорт генеалогияһын башҡа бер мәғрифәтселәр ҙә үҙ итә, уны үҙҙәренең тарихи әҫәрҙәрендә ҡуллана. Мәҫәлән, суфый шәйехе, шағир Мөхәмәтғәли Соҡоройҙоң (1826 - 1889) улы Ғарифулла Кейеков үҙенең тарихи яҙмаларында шул уҡ шәжәрә мәғлүмәттәрен ҡуллана. Тажетдин Ялсығолдан айырмалы, Ғарифулла Кейеков төҙөгән Табын һәм Ирәкте шәжәрәһендә ошо ырыуҙарҙың төп бабаһы итеп һаналған Майҡы бей Бәкатун баба улдары иҫәбенә индерелә.

Бында бына нимә үтә ҡыҙыҡлы: Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш зонаһында заманында ҡеүәтле сәйәси этник берләшмә төҙөгән әйеләр Бәкатун бабаның туранан-тура вариҫы итеп күҙаллана. Шәжәрәүи тарихнамәләрҙә байтаҡ ҡына башҡорт ырыуҙарының килеп сығышы (шул уҡ тамъян, үҫәргән, табын, әйле, күбәләк, бәкәтин, һарт, тырнаклы, түбәләҫ, дыуан, һалйот һ.б.) Алтай - Урта Азия территорияһы менән бәйле бәйән ителә: иртә урта быуаттар осоронда уҡ ошо географик ареал башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең тәү төйәге, тип иҫкә алына.

Әйле башҡорттарының риүәйәттәрендә уларҙың ата-бабаларының Бохара тарафтарында, ул яҡтағы Башҡорт тауҙары итәгендә йәшәгәнлеге хаҡында һөйләнелә. Ысынлап та, Көнсығыш Бохарала Пашхурд тауҙары, ә Амударъя буйында Пашхурд ауылы ла бар. Йәнә, ошо Пашхурдтан алыҫ түгел урынлашҡан Байсун ҡалаһы районында үзбәктәрҙең айынны ырыуы вариҫтары йәшәй, ошо ырыу атамаһы башҡорт әйеләре исеменә тура килеүе беленеп тора. Ошо фактта билдәле бер этнологик һығымта эшләрлек ерлек булыуын фаразларға була. Этнолог Р.Ғ Кузеев та әйеләрҙең тарихи сығышын боронғо уғыҙҙар менән бәйләп аңлатыуҙы нигеҙле, тип тапҡан. Был фаразды ғалимдың ғилми фантазияһы ғына итеп ҡарарға ярамайҙыр: ҡытайҙарҙың Суй-шу тарихи хроникаһына ярашлы (VII б.), уғыҙҙарҙың этник берләшмәһенә ингән ырыу-ҡәбиләләр исемлегендә башукили (ҡытай телендә "р" өнө булмауына иғтибар итеү фарыз) ҡәүеме лә иҫкә алына. Көньяҡ Уралда дөйөм башҡорт исеме менән билдәле булған ырыуҙар берләшмәһе менән Ҡытай, Үҙәк Азия халыҡтары тарихында иҫкә алынған иштәк-башҡорттарҙың бер үк боронғо ҡәүем булыуын хәҡиҡәти факт, тип ҡабул итергә кәрәктер.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 12-14-се һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Ул дивизия әллә ни ҙур ҡыйынлыҡ күрмәй, сөнки беренсе полк командире полковник Романенко, шундағы Штеревка ауылында тыуып үҫкән кеше, урындағы шарттарҙы яҡшы белеп эш итә. Был һуғышта тотош корпустың рейдтән сығыуы өсөн юл ярып барыусы беҙҙең дивизия ауыр юғалтыуҙарға осраны - дивизияның командире генерал-майор М. М. Шайморатов, майор Ариткулов, майор Ғималетдинов, капитан Камалетдинов һәм башҡа бик күп иптәштәр һәләк булды. Был юғалтыу - бөтә һуғышсылар, командирҙәр өсөн дә ҙур ҡайғы булды, ләкин башҡорт егеттәренең һуғышсан рухын ҡаҡшата алманы, фашизмдән үс алыу теләгеген тағы ла нығыраҡ дөрләтте. Рейдтән һуң бер аҙ ял итеп, көс туплағандан һуң, улар дошманға тағы ла ярһыбыраҡ, үсәнеберәк ташландылар...

Төрлө сәбәптәр менән 24 февралдә үҙебеҙҙең яҡҡа сыға алмай бүленеп һәм яраланып ҡалған һалдат һәм офицерҙәр дошман тылында, урындағы партизандарға ҡушылып хәрәкәт итәләр. Ошолар араһынан өлкән лейтенант Ҡасимов бөгөн дә Өфөлә йәшәй, һуңынан ул Котовский исемендәге партизан отряденең комиссары булып китә.

35 ауыр яралы һуғышсы менән Чернухино утарында ҡалдырылған комсомолец, өлкән лейтенант Зиннәт Вәлиев, беҙ рейдтән сыҡҡандан һуң күп тә үтмәй, күп ауырлыҡтар кисереп, 32 яралыны дошман тылынан иҫән-һау алып сыға, өсәүһе юлда үлеп ҡала. Вәлиев хәҙерге көндә пенсияла, Сибайҙа йәшәй. Уға әле лә төрлө яҡтарҙан мең рәхмәттәр белдереп яҙылған хаттар килеп тора. Изгелек ерҙә ятып ҡалмай, тигәндәр бит боронғолар.

Дошман тылында корпус үҙенә йөкләтелгән бурысты тулыһынса үтәне. Фашистәрҙең 62-се, 164-се пехота дивизияларына һәм 18-се танк дивизияһына ҙур юғалтыуҙар яһаны, 36 урында тимер юлын һүтте, бер нисә күперҙе шартлатты, дошмандың меңләгән һалдат һәм офицерен юҡ итте, байтаҡ танкыларын, 15 ҡорал складын, 10 аҙыҡ складын, 85 пушкаһын, 54 пулеметын, 152 автомашинаһын, 830 повозкаһын юҡҡа сығарҙы, 62-се дивизия штабын ҡулға алды. Дошман ҡулына эләккән 1480 совет кешеһен ҡоллоҡтан ҡотҡарҙы.

Дошман тылында айырым батырлыҡ күрһәткәндәре өсөн бик күп офицерҙәр, һалдаттар хөкүмәт ордендәре менән бүләкләнде.

Штаб начальниге полковник И. И. Голенев, генерал Шайморатов һәләк булғас ваҡытлы рәүештә дивизия командире вазифаһын үтәгән подполковник Г. Е. Фондеранцев, штабтың оператив бүлек начальниге подполковник Г. А. Черников, капитан С. Х. Хәбиров, подполковник М. Вәлиев, капитан Х.Бикчурин, доктор А. Сарыгин һәм З. Вәлиев - бөтәһе 195 кеше төрлө ордендәргә һәм миҙалдарға лайыҡ булды".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ ***Башҡорт шәлселәре бөгөн ҙур дәүләт баһаларына лайыҡ, уларға атҡаҙанған еңел сәнәғәт эшмәкәре, мәҙәниәт хеҙмәткәре, халыҡ сәнғәте оҫтаһы кеүек дәрәжәле исемдәр бирергә күптән ваҡыт.***



# ХАЛЫҠ СӘНҒӘТЕ

**"Ысын халыҡ оҫталары бер-береһенә ярҙам итә". Башҡорт кейеҙен тергеҙеүсе йәш рәссамдарҙың һәм һөнәрмәндәрҙең республика семинарҙары етәксеһе, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының профессоры, рәссам Тәлғәт Мәсәлимовтың һүҙҙәре был. Уның әйткәне - шәкерттәренә ғүмерлек хеҙмәт һәм ижад девизы. Халыҡ мираҫына һаҡсыл ҡарашты маяҡ итеп алған 2022 йыл беҙгә яңы шатлыҡлы асыштар, ижади ҡаҙаныштар вәғәҙә иткәндәй, сөнки халыҡсан сәнғәттең яҙмышын һәм асылын ҡайғыртыу тураһында һүҙ сыҡты.**

## Йылды бағышлайбыҙ

Беләбеҙ, был өндәмә, йәғни йылды Рәсәй халыҡтарының Мәҙәни мираҫ йылы тип нарыҡлау юҡтан бар булманы: быға тиклем дә халыҡ кәсеп-һөнәрҙәрен өйрәнеүгә һәм тергеҙеүгә, заманса ҡалыпҡа һалыуға байтаҡ белем, көс һәм дәрт-дарман бағышланды. Бигерәк тә Башҡортостан Республикаһы Халыҡ ижады үҙәгенең эшмәкәрлеге тап ошо рухи һәм һөнәри хазиналарҙы яҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән. Йүнәлтелеүен йүнәлтелгән, ҡағыҙҙа программа-проекттар төшөрөлгән, әммә ошо бер генә ойошманың, ошо яңғыҙ бер генә дәүләт учреждениеһының ҡулы ла, ҡоласы ла, хәстәре лә барып етмәгән ерҙәр күп әле. Быйылғы Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылында был йүнәлештәргә яңы мөмкинлектәр бирерлек дәүләт иғтибары булырға тейеш һәм эҙмә-эҙлекле яңыса ҡараш менән күҙ һалырға, яңы кимәлгә күтәреп-бороп ебәрергә ваҡыт, тип әйтер инем.

Һөнәрмәнлек халҡыбыҙҙы меңәр йылдар йәшәткән, тимәк, ул - иң ышаныслы мираҫ. Үҙемдән сығып әйтәм: бала саҡтан уҡ мине иң һөйөндөргәне һәм һоҡландырғаны - башҡорт кешеләренең һөнәрмәнлеге, уларҙың тырышып-илһамланып донъя көтөүе һәм оҫталыҡ ысулдары. Мәҫәлән, кем әйтмешләй, "беҙ дебет ашап үҫтек". Йәғни, әүәл-әүәлдән тарихсылар һәм этнографтар теркәп ҡалдырған шаһитнамә буйынса, "башҡорт ҡатын-ҡыҙының егәрле һәм булдыҡлы булыуы арҡаһында һәр башҡорт йортонда шәл, балаҫ, туҡыма һуғыу урыны тора, улар һарыҡ, кәзә, дөйә йөнөнән һәм мамығынан кейем-һалым һәм урын-ер ҡаралтыһы әҙерләй, баҙарҙа һатып ғаилә кәрәк-ярағын хәстәрләй..."

## Башҡорт дебет шәле

Бөгөн башҡорт шәле тигән мөғжизә һаман да кешеләрҙе йылыта, дауалай, һөйөндөрә, кейендерә. Ейәнсура районы шәлселәре иҫәпләүенсә, улар бер йылда йәмғеһе ике меңләп шәл бәйләй. Был байлыҡ башлыса Ырымбур, Ҡыуандыҡ, Мәскәү, Ханты-Манси ҡалаларына һәм улар аша бөтә илгә тарала. Шәл бер ҡасан да моданан сыҡмай, бигерәк тә яҡшы сифатлы башҡорт кәзәһе дебетенән бәйләнгәне. Ул Волгоград яғында ҡаҡ далала көтөү-көтөү булып йөрөгән икенсе тоҡом кәзәләрҙең быяла кеүек ялтыр һәм ҡоро мамығынан ныҡ айырылып тора. Яҡшы шәл бәйләргә теләгәндәр алама дебеткә тотонмай, ә кәрәк ергә барып, табып, кәрәкле дебетте алып ҡайта. Шунан бармаҡҡа уралып торған йомшаҡ, дымлыраҡ һәм хуш еҫле дебетте рәхәтләнеп эшкәртеп, шәл бәйләп ҡуя. "Башҡорт шәле" республика фестивалдәре 2000 йылдарҙан бирле үтә, уларҙы Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Урал" галереяһы ойоштора. Ләкин шәлселәргә иғтибар һаман да аҙ. **Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғолда "Башҡорт шәле музейы" асабыҙ, тигән вәғәҙәләр бар ине. "Өфөлә шәл баҙарҙары" өсөн махсус урындар бүләбеҙ, тигән пландар ҙа һауала аҫылынып ҡалды. Республика Башлығының ауыҙынан сыҡҡан "Башҡорт шәле - республика бренды", тигән ҡанатлы һүҙҙәрҙе лә оноттоҙолар. Халыҡ кәсеп-һөнәрҙәрен өйрәтеү, үҫтереү шарттарын булдырыу өсөн "Оҫталар мәктәбе" - "Школа мастеров" асыу, унда башҡорт халыҡ сигеү-ҡайыу төрҙәрен өйрәтеү, ағас һәм таш һырыу оҫталарын һәм башҡа һөнәрмәндәрҙе ҡайғыртыу тураһында тәҡдим-үтенестәрҙе бер кем дә ҡолағына элмәй. Оҫталарҙан әҙер әйберҙәрҙе йыйып, бер үк нәмәләрҙе ҡат-ҡат күрһәткәндән халыҡ сәнғәте алға китмәй. Был хаҡта 2021 йылдың декабрь айында үткән күргәҙмә асыҡ күрһәтте. БР Сәнәғәт, энергетика һәм инновация министрлығы менән БР Һөнәрселек палатаһы ҡайҙандыр ситтән килгән оҫталарға иғтибарын бүлә, ә үҙебеҙҙәге халыҡ һөнәрмәндәренә ярҙам күҙ буяу өсөн һымаҡ тойола.**

Әйтәйек, Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан шәлсе Зөлфиә Бикбулатова биш мәртәбә (!) республика фестивалендә гран-при яуланы, уның бәйләгән шәлдәре Бөтә Рәсәй Халыҡ һөнәрҙәре күргәҙмәһенә һәм Халыҡ сәнғәте музейҙарына ҡуйырлыҡ, ләкин ул үҙ хеҙмәте өсөн лауреат исеме, ҡағыҙ рәхмәт хаты һәм бер нисә мең аҡса алыу менән - вәссәләм. Ә уның һәр шәле - сәнғәти күренеш. Ғөмүмән, Ейәнсура, Стәрлебаш, Хәйбулла шәлселәренең ифрат матур ижады - республика халҡының мираҫы. Башҡорт шәлселәре боронғо кәсепте дауам итеүсе, үҫтереүсе, пропагандалаусы булараҡ, бөгөн ҙур дәүләт баһаларына лайыҡ, уларға атҡаҙанған еңел сәнәғәт эшмәкәре, мәҙәниәт хеҙмәткәре, халыҡ сәнғәте оҫтаһы кеүек дәрәжәле исемдәр бирергә күптән ваҡыт. Халыҡ оҫталары беҙҙә бик күп, улар дәүләт яҡлауына һәм маҡтаулы исемдәргә, юғары пенсиялар тәғәйенләнеүгә лайыҡ.

## Аҫалы балаҫтар

Башҡортостан йәйғоро - аҫалы балаҫтар, тигән ҡанатлы һүҙҙәрҙе раҫлаған оҫталар ҙа бар бит әле. Уларҙың хеҙмәте заманында ғаиләләрен ашатҡан, кейендергән, һөйөндөргән. Ғаилә - дәүләт тотҡаһы. Бөгөн дә Миәкә, Әлшәй. Бишбүләк, Дәүләкән, Ғафури, Архангел, Сибай балаҫсылары бик рәхәтләнеп яңы аҫалар һуғыр ине. Ләкин... "Башҡорт аҫалы балаҫы" фестивалдәре әлеге лә баяғы Мәҙәниәт министрлығы менән "Урал" галереяһы ҡарамағынан ары китә алмай ҙа ҡуя. Хатта "Ағиҙел" художество кәсептәре предприятиеһы ла уларҙы үҙ ҡанаты аҫтына ала алмай. Һәм был боронғо кәсеп айырым оҫталар ҡулында ҡала килә.

Башҡорт аҫалы балаҫ, буй балаҫ, турпыша, тирүгә һуғыу оҫталары ла яңы станоктар яһатып ала. Станоктар

### кем хәстәрләр

Әлшәйҙә, Хәйбулла районы Бәләкәй Арыҫланғол ауылында (Риф менән Азамат Суриндар), Бөрө ҡалаһында (Роза Ғарифуллина), Миәкә районы Елдәр ауылында (Гүзәл Вәлитова), Архангел районы Орловка ауылында (Фәнисә Сәйфетдинова-Гольцова) һәм башҡа урындарҙа һатыуға яһала башланы. Тимәк, ҡорал эшләй, ир маҡтала, тигәндәй, оҫталарға тейешле ярҙам итерлек ҡорамалдар кәрәк (әйтеме лә бар бит: "Асыҡҡанға балыҡ бирмә, ҡармаҡ бир"). Баймаҡ районы Йүкәләр-Ишмырҙа ауылы биләмәһендә ҡатын-ҡыҙҙар кәзә дебетен "шапалау" эшен тиҙләтә торған махсус



**✓ Тирмә биҙәргә булһа, күҙ яуын алырҙай башҡорт ырыу һөлгөләре, аҫалы баластары, сүпләм шаршауҙары, тамғалы кейеҙҙәре, ҡайыулы күлдәк-алъяпҡыстары һәм башҡалары кәрәк.**



# Яҙмышын...
## һәм тергеҙер?

электр мамыҡтеткес ҡулайламаһы менән таныш. Әлбиттә, ейәнсуралар йәки күгәрсендәрҙең кәзә дебетен төпрәнән айыра торған аяһы бөтә был яңылыҡтарҙан өҫтөн, ул дебетте ысынтылап таҙартып бирә, һәм тап шул ая - милли эш ҡоралы, ая - тергеҙелергә тейешле мираҫ.

Был йәһәттән йәнә бер яңылыҡ: Йылайыр районы ағинәйҙәре йәйләүсә туҡыу ҡорамалы яһап алған. Улар хәҙер бындай еңел станоктарҙа ҡушаҡ, шарф, билбау, кисет-моҡсайҙар һуғып күргәҙмәләр ҡора.

### Кейеҙ

"Аҡ кейеҙ - башҡорттоң сәләмәт йәне, һауһаҡ тәне, шат көйөфө, тәрән хәтере, зирәк аңы, йырлы-моңло таңы. Аҡ кейеҙ - башҡорт халҡын йылытҡан, һауыҡтырған, йәшәткән, үрсеткән". Әбйәлил яғынан бөтә илгә танылған күренекле табип Ишмырҙа Һиҙиәтовтың аманат был һүҙҙәре бер ҡасан да ергә һалынмаҫ төҫлө...

Башҡорт кейеҙен тергеҙеүселәр ҙә республикала 2000 йылдар башында уҡ ҡуҙғалып, семинарҙар үткәреп, Мәскәү, Питер күргәҙмәләрен урап ҡайтты. Бөгөн Республика халыҡ ижады үҙәге янындағы "Урал" галереяһы һаман да семинарҙар ойоштора, башҡорт кейеҙен кейемдә, сәхнәлә, халыҡ уйын-байрамдарында киң ҡулланыу буйынса күргәҙмәләр үтә. Кейеҙгә тотонған тәбәктәрҙә тормош-көнкүреш кәрәк-ярағы етештереү цехтары кейеҙҙән аяҡ кейеме әҙерләй. Хәйбулла районы Бәләкәй Арыҫланғол ауылы мәҙәниәт йорто янында ҡатын-ҡыҙҙар йыйылып, кейеҙ ҡаталар баҫырға өйрәнә.

"Мәргән уҡсылар", "Төньяҡ амурҙары хәрби-патриотик төркөмө" егеттәре лә кейеҙһеҙ юлға сыҡмай. Башҡорт һунарсыһының, яугирының айырылмаҫ монаяты булған кейеҙ ҡалҡан һыуға батмай, утта янмай. Ҡалҡан, көләпәрә, ҡыуыш, һал - был кейеҙ ҡаралдыларҙың нисә төр йөндән баҫылыуы, эркет менән ҡатырылыуы һәм башҡа үҙенсәлекле әҙерләү ысулдары менән таныуы үҙе үк халҡыбыҙҙың ни хәтле тырыш, донъяҫыл һәм уңған булыуын һөйләй. Һәр бер сәйәхәтсе, турист башҡорт ҡалҡаны тип аталған еңел һәм уңайлы ҡаралдыны ялда һәм юлда тотона ала.

### Милли кейем

Хәйбулла районы биләмәһендә үткән "Гөләбаш байрамы" гел күҙ алдында: учалылар, йылайырҙар, баймаҡтар һәм ырымбурҙар гәжәп үҙенсәлекле асышҙары менән уртаҡлашты - милли кейемдә лә бик күп серҙәр асылмай ҡалған. Ошо милли сәнғәт мираҫы өлгөләрен ҡунаҡтарға тегеп, кейеп күрһәтеүе - үҙе бер оҫтахана һәм ғилми-тикшеренеү өлгөһө ине. Ләкин ни хәтле генә төрлө булһалар ҙа, башҡорт кейемен һәм биҙәүесен тергеҙеүселәр бер ҡасан да бер-береһен көмһетмәй. Киреһенсә, ошондай яуаплы һәм үҙенсәлекле ҡул эшен тотҡандар һәм ҡәҙерен белгәндәр бер-береһенә һорау яуҙыра, ихлас бәхәсләшә, кәңәшләшә, отоп алырға һәм аңларға ынтыла. Әле яңы йыл алдынан интернет битендә бер рәссам ижад иткән биҙәүестәрҙән мыҫҡыллап көлөргә маташҡан әҙәмдең хаяһыҙлығына аптырарлыҡ. Халыҡ оҫтаһы бер ҡасан да икенсе оҫтанан көлмәй. Ҡулы ҡысығандан тотонмай бит кеше был эшкә - рухы, күңеле ынтылған эшкә йөрьәт итә. Биҙәүестәрҙең башҡорт милли традицион өлгөләрен һәм рәссамдар ижад иткән заманса уңышлы төрҙәрен хөрмәт итеү кәрәк. Зауыҡһыҙ һәм сифатһыҙ эшләнгәндәре үҙҙәренән-үҙҙәре төшөп ҡала, уларҙы "башҡорттоҡо", "иҫке фотонан", "мин шулай тип уйлайым", тигән ярлыҡтар ғына сәнғәт кимәленә күтәрә алмай. Быны бөгөн оҫталар баҙары ла бик яҡшы төшөнә. Шуға күрә "Тамға" фестиваленә бөтә яҡтан уйланған, милли асылы, фәнни нигеҙе һәм эшләнеше юғары кимәлдә булған эштәр сыға. Ғөмүмән, "Тамға" фестиваленең әһәмиәте һәм һөҙөмтәләре бик ҙур хыял-проекттарға юл аса, уның ҡәҙерен һәм баһаһын ғына беләйек.

### Ниңә һаман иғтибар юҡ?

Башҡортостан Республикаһының Сәнәғәт, энергетика һәм инновация министрлығы һуңғы осорҙа халыҡ һөнәрмәндәренә йөҙ менән борола биреп ҡуя. Был йәһәттән уларға борондан дебет шәл һуҡҡан һәм бәйләгән, "Ырымбур мамыҡ яулығы" тигән брендҡа төп нигеҙ булған башҡорт шәл оҫталары Өфөләге "ВДНХ-ЭКСПО" сауҙа-күргәҙмә комплексы айырым майҙансыҡтар бүлде. Дөрөҫөрәге, был махсус һатыу һәм күргәҙмә ҡороу урындары уларға бары тик Республика халыҡ ижады үҙәгенең хәстәрләүе менән генә эләкте. Юғиһә, шул уҡ башҡорт аҫалы баласы ла бөтә илгә таралған мәҙәни хазинабыҙ, һөнәрмәндәребеҙҙең илгә бүләк иткән затлы бренды. Әммә боронғо аҫаларҙы һаман да өйрәнеүселәр, баластарҙы күсереп һуғыусы һәм яңыртыусылар БР Сәнәғәт, энергетика һәм инновация министрлығы тарафынан әлегә бер ниндәй ҙә ярҙам күрмәй. Бары тик "Ағиҙел" художество кәсептәре предприятиеһы күкле-йәшелле сағыр төҫтәге күҙҙе алартырлыҡ пледтар сығарыу менән мәшғүл. Рәссамдары һәм технологтары башҡорт аҫалы баластары күргәҙмәләрендәге халыҡ оҫталары эшендәге тәбиғи төҫтәр, үҙгәртелмәй торған оя- оя аҫалы биҙәктәр - һәр ерҙә танылып торған милли орнаменттарыбыҙға күҙ һалмай микән, тип аптыранырла? Уларға тағы нисек еткерергә, ниндәй һүҙҙәр табырға икән?..

Тирмә биҙәргә булһа, күҙ яуын алырҙай башҡорт ырыу һөлгөләре, аҫалы баластары, сүпләм шаршауҙары, тамғалы кейеҙҙәре, ҡайыулы күлдәк-алъяпҡыстары һәм башҡалары кәрәк. Уларҙың һәр ҡайһынының - айырым халыҡ ижады сәнғәте өлгөһө һәм һәйкәле булырҙай оло хазина. Һәр ҡайһының махсус китаптар, альбом-каталогтар, фәнни хеҙмәттәр, фестиваль-күргәҙмәләр менән күрһәтеү кәрәк булып сыға. Халыҡ ижады үҙәге яңғыҙ нисек өлгөрмәк? Ил аҡсаһына эшләп ултырған Башҡортостан Республикаһының Сәнәғәт, энергетика һәм инновация министрлығы, Һөнәрселек палатаһы һәм башҡалар ситтә ҡалмаһын ине. Ғалимдар ҙа бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Үҙебеҙҙең ҡыҙҙар һәм егеттәр араһында этнографтар юҡ тиерлек. Наил Бикбулатов, Раил Кузеевтар башлаған эш нишләп башҡорт йәштәрен ҡыҙыҡһындырмай? Башҡортостан Фәндәр Академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтындағы Этнография бүлеге конференциялар, экспедициялар һәм оҫтаханалар менән эшләйме-юҡмы, ләкин халыҡ һөнәрмәндәре күргәҙмәһендә бер генә ғалимдың да килеп тә күренгәне юҡ. Улар үҙ өләштәрен индерергә йыйынмай микән ни?

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Рәшиҙә Ғиззәтуллина етәкселегендә Бөрйән ҡатындары теккән сергетыштар, Рима Абакова теҙгән селтәрҙәр, Римма Ғарифуллинаның милли күлдәкле ҡурсаҡтары, "Селтәр" студияһының күлдәктәре, Гөлгөнә Зәйнетдинованың биҙәүестәре, Светлана Ишемголованың еләндәре, Сәрүәр Аслаеваның камзулдары һ.б. - бөтәһе лә оло ижади ташҡын, халыҡ оҫталары алдынғылары булып ҡалҡып сыҡты. Был халыҡсан ынтылыш республикала бөтөнләй ҡороп ҡалған милли кейем, биҙәүес, уйынсыҡ, ҡаралты - йәғни милли мираҫты егерме беренсе быуат башында тергеҙә, йән өрә, һайлап яңырта. Уларға һатыу өсөн генә түгел, сифатлы эшләү, өйрәнеү, фәнни яҡтан белем дә бик кәрәк.**

**Сәрүәр СУРИНА.**







✓ **Нисек мөхәббәт тип хыялланып йөрөгән йәш ҡыҙҙы шулай алдарға мөмкин? Ҡапыл Сания иҫенә төштө. Ул үҙе лә Санияны ышандырҙы, өмөтләндерҙе, ә ысынында уны алдап йөрөй түгелме?**






Шулай йәшәп ятҡанда, беҙҙең ауылға йәш агроном эшкә килде. Колхоздың тарҡалған сағы, уның урынында асылған кооперативҡа саҡырғандар икән.

Егеттең мине тәү күреүҙә матур итеп йылмайып:

- Һеҙҙең ауылда ла ошондай сибәрҙәр бар икән! Һин бит, һеңлем, ҡойоп ҡуйған киноактриса! - тип ысын күңелдән һоҡланыуы мине арбаны ла ҡуйҙы.

Ул үҙе бик һөйкөмлө ине. Бөҙрә сәсе, мөләйем йөҙө, матур итеп йылмайыуы, оҙон, һомғол буйы - бөтәһе лә килешкән. Тәүге осрашыуыбыҙҙан һуң күҙҙән юғалғансыға уның артынан ҡарап тороп ҡалдым. Тиҙерәк уны тағы күргем, яғымлы һүҙҙәр әйткәнен ишеткем килде. Шунан һуң егетте тап итеү өсөн көн дә тиерлек ул йөрөгән юлды һағаланым...

Хәкимә Айҙарға боролоп ҡарап алды:

- Һинә ҡыҙыҡмы былар?

- Һөйлә, һөйлә, бик ҡыҙыҡ, - тип дәртләндерҙе ҡатынды Айҙар.

Егет Хәкимә хаҡында бөтәһен дә белергә тейеш. Уның яҙмышы тураһында күберәк тыңлаһа, күп нәмәне асыҡлай алыр һымаҡ. Ниңә йыш ҡына бер ниндәй сәбәпһеҙ һөйләшеүендә уҫаллыҡ сатҡылары һиҙелеп ҡала, ни өсөн Сәкинә менән ирешкәндәр, ниңә шул тиклем асыуланып һеңлеһен тупһанан этеп ҡолатҡан? Икенсенән, нисек ирһеҙ бала тапҡан; егерме бишен үткән, ни өсөн һаман яңғыҙ? Үҙе әйтмешләй, сибәр генә бит - бындай ҡатын артынан егеттәр тубырлашып йөрөргә тейеш кеүек тә баһа.

- Бына шулай, - тип әйтеп алды ла Хәкимә йәнә һөйләй башланы. - Уны осратһам, бөтә тәнемдә ҡыуаныс солғап ала, буштан-бушҡа көлгөм килә, хатта йырларға теләйем. Ул китергә өлгөрмәй, тағы осрашыуҙы түҙемһеҙләнеп көтә башлайым, ә унһыҙ үткәргән ваҡытым ҡара төнгә әйерелә, кәйефем селпәрәмә була, бер кемде күргем, һис кем менән һөйләшкем килмәй. Иң ғәжәбе - егеттең тәүге осрашыуҙа әйткән һүҙҙәренән башҡа бер тапҡыр ҙа һөйләшмәнек. Шулай бер-беребеҙгә йылмайышып йөрөй торғас, бер көндө ул тотто ла:

- Һеңлем, һинең исемең нисек? - тип һораны бит. Мин быны көтмәгәйнем, ҡаушауымдан, ышанаһыңмы, юҡмы, исемемде оноттом да ҡуйҙым! Ни әйтергә белмәй, уға ҡарап тик торам. Ҡотом осоуо йөҙөмә сыҡты, күрәһең, ул көлдө лә: "Ҡурҡма, мин матур ҡыҙҙарҙы ашамайым", - тине лә, китеп барҙы. Мин был ваҡытҡа уның исемен дә белеп алғайным. - Фәрхәт. Шундай матур! Бәрхәт кеүек. Музыка һымаҡ моңло ишетелде миңә был исем.

Ошо ерҙә Хәкимә, уйсан йылмайып, тынып ҡалды. Ул хикәйәһен нисек итеп дауам итергә белмәй кеүек ине.

- Шунан? - тип һораны Айҙар Хәкимәнең һөйләргә теләгән яңынан уятыр өсөн.

- Шунан - шул, - тип әйтеп алғас, ҡатын күңелендә тупланған тойғоларына йәнә ирек бирҙе. - Фәрхәтте күргәс, ҡаушайым да төшәм, тинем бит. Шулай ҙа уның янында юғалып ҡалмаҫ өсөн киләһе осрашыуҙа үҙемдә ҡайһылайыраҡ тоторға, нисек һөйләшергә кәрәклеген ныҡлап уйлап алдым. Ул, һаумы, тиһә, һаумыһығыҙ, тием дә исемен белһәм дә: "Һеҙҙең исемегеҙ нисек?" - тип һорайым. Шунан үҙемдекен әйтәм. Артабан ҡайҙа тыуғанлығын, уҡыуын һорайым. Һөйләшеп китеү өсөн ниндәй ҙә булһа сәбәп кәрәк бит инде. Ләкин киләһе юлы Фәрхәттең ҡаршыға килеүен күреп ҡалғас, йөрәгем дарҫлап тибә башланы. Мин йәнә ҡаушауымды тойҙом, сөнки батырсылығым етеп, уның менән һөйләшеп торормдо күҙ алдына килтерә алманым.

Әммә бөтәһе лә икенсе төрлө килеп сыҡты. Был юлы Фәрхәт миңә етәрәк туҡтаны ла, һәр ваҡыттағыса матур йылмайып, тапҡырына еткәнемде көтә башланы. Мин дә туҡтап ҡалдым. Фәрхәт берике аҙым атлап, ҡаршыма килеп торҙо:

- Һылыуҡай, исемеңде иҫләнеңме?- тип һораны ул. Шунан үҙенекен әйтте, ошолай һөйләшеп киттек. Фәрхәт, барған юлынан боролоп, минең менән йәнәш атланы. Ул тәүҙә минең хаҡта һорашты, аҙаҡ үҙе тураһында һөйләне. Фәрхәт мине мәктәпкә тиклем оҙатты. Иң мөһиме, хушлашҡанда шундай һүҙҙәр әйтте:

- Хәкимә, һин миңә бик оҡшайһың. Осрашайыҡ тип әйтер инем. Ауылда шуныһы насар - урыны юҡ. Урамда етәкләшеп йөрөп булмай бит инде, уңайһыҙ. Әйҙә, былай эшләйек. Бөгөн кис Баймаҡта халыҡ театрының спектакле була икән, шуны барып ҡарайыҡ.

Мин, әлбиттә, ризалаштым. Фәрхәттең машинаһы бар. Шул кис ауыл осонда мин уны түҙемһеҙләнеп көтөп тора инем инде. Фәрхәт менән йәнәш ултырып, уның машинаһында барыу минең өсөн иҫ киткес бәхет булып тойолдо. Уға ла шулай ине шикелле. Ураған һайын миңә ҡарап ала ла, матур итеп йылмая. Фәрхәт бик шаян булып сыҡты, юл буйы төрлө мәҙәктәр һөйләп, һынымды ҡатырып бөттө. Баймаҡта кемдәрҙе күрҙек, ниндәй спектакль булды - берәһе хәтерҙә ҡалмаған. Мин кис буйы Фәрхәтте генә күрҙем, ҡарашымды унан алманым. Ул бик аҡыллы ине, үҙе шундай итәғәтле - машинаһына ишеген асып ултырта, сыҡҡанда ла шулай эшләй. Баймаҡҡа килгәс, ҙур гөлләмә һатып алып, бүләк итте. Минең өсөн ул идеал ине. Ундай егетте тап итермен тип ғүмерҙә лә уйламаным бит мин. Шундай бәхетле инем. Ҡыҫҡаһы, Фәрхәткә үлеп ғашиҡ булдым.

- Ә нисә йәш ине уға? - тип һүҙ ҡыҫтырырға итте Айҙар.

- Уғамы? Уға - егерме дүрт. Ауыл хужалығы институтын бөткән ине.

- Тәжрибәле икәнлеге күренеп тора, - тип көләмһерәне Айҙар. Теләһә лә, теләмәһә лә ҡыҙҙың Фәрхәтенә ҡарата көнләшеү тойғоһо егеттең йөрәген һыҙлатып ебәрҙе. Яҙмышының был өләшен тиҙерәк ослаһын өсөн: "Нимә менән бөттө мөхәббәтегеҙ?" - тип һорарға итте Айҙар, әммә тәүге һөйөүе тураһында ҡатындың илһамланып һөйләүен күреп, уны был бәхетенән айыра алманы, үпкәләтеүҙән ҡурҡты.

- Ә һинә нисә йәш ине? - тип кенә һораны Айҙар.

- Мин унынсыны тамамлап йөрөй инем. Ун ете. Шулай, Фәрхәттән башҡа бер ни күрмәй, бәхет тулҡындарында йөҙөп ятҡанда, оло фажиғә килде беҙҙең ғаиләгә - атайым менән әсәйем Баймаҡ - Сибай юлында машинала упҡынға осоп һәләк булды. - Ҡатын тынып ҡалды.

Уның хәлен аңлап, Айҙар ҙа өндәшмәне, фәҡәт ҡатынды, яурынынан ҡосаҡлап, үҙенә ҡыҫты. Бындай нескәлек ауыр хәтирәгә бирелгән ҡатындың күңелен иретеп ебәрҙе һәм ул әкрен генә илай башланы. Хәкимәне тынысландырыр өсөн ни эшләргә белмәйенсә, Айҙар уның яурынын һыйпаны. Күпмелер ваҡыт үткәс, Хәкимә тыныслана төштө, күҙ йәштәрен һөрттө.

- Тиҙлеге... ҙур булған... тинеләр, - Хәкимә, һәр һүҙ һайын ҡырҡа-ҡырҡа тын алып, өҙөк-өҙөк итеп әйтте быны. - Был беҙҙең ғаилә өсөн оло ҡайғы булды. Мин ауырыу өләсәйем, алтынсыла уҡыған һеңлем, оло донъя менән тороп ҡалдым. Өләсәйемдең пенсияһы бәләкәй генә. Ҡайһылайтып шул аҡсаға көн күрергә? Әлбиттә, малдарыбыҙ бар. Ләкин ун ете йәшлек ҡыҙ уларҙы нисек ҡараһын? Әкренләп малды һаттыҡ, бер һыйыр ғына ҡалдырҙыҡ. Өләсәйем түшәктә ята. Ул үҙ өйөндә йәшәй ине. Ураған һайын уны ҡарарға барыуы ауыр ине, шуға үҙебеҙгә күсерҙек. Ошондай хәлдә Фәрхәт төрлөсә ярҙам итте. Донъяны ла ҡарашты, аҡса ла бирҙе. Мин унынсыны бөткәс, институтҡа инергә йыйына инем. Хәҙер ул хаҡта онотторға тура килде. Беҙҙең магазинда урын бушағайны, шунда һатыусы булып урынлаштым, эш хаҡы ала башланым. Әкренләп тормошто рәткә һалған кеүек инем. Көтмәгәндә тағы бер бәлә килде. Көҙгә табан, уйламаҫтан, Өфөнән Фәрхәттең ҡатыны килеп төштө. Был уның Буранлыла икенсе тапҡыр күренеүе ине. Уға беҙҙең хаҡта һөйләгәндәр. Оло скандал булды. Ҡатыны Фәрхәтте Өфөгә алып ҡайтып китте... - Хәкимә, ауыр көрһөндө лә, йәнә тынып ҡалды.

Айҙар был хәбәрҙе ишетеп, ни тиергә белмәйенсә ултырҙы. Нисек? Хәкимә белмәгәнме ни уның өйләнгәнлеген? Бына ҡәбәхәт! Нисек мөхәббәт тип хыялланып йөрөгән йәш ҡыҙҙы шулай алдарға мөмкин? Ҡапыл Сания иҫенә төштө. Ул үҙе лә Санияны ышандырҙы, өмөтләндерҙе, ә ысынында уны алдап йөрөй түгелме? Дөрөҫ, ике көн элек кенә тойғоларының ошолай ҡырҡа боролош яһай башлар тип, һис тә уйламағайны. Ләкин бындай ғына аҡланыу Айҙарҙы тынысландырманы. Ул, йөрәген баҫҡан ауыр тойғоларға бирелеп, киләсәге хаҡында борсолдо. Ни менән бөтөр былар барыһы ла? Ҡайҙа дөрөҫ юл? Уны таба алырмы Айҙар? Тапмаһа, ғүмер буйы шул арҡала үкенеп йәшәрме?

Хәкимә лә, үҙ уйҙарына бирелеп, өндәшмәй ултыра. Тынлыҡтың оҙонға һуҙылыуын аңлап, һүҙҙе бөйләп ебәрер өсөн:

- Һин уның өйләнгәнен белмәнеңме ни? - тип һораны Айҙар.

- Белдем, - тине ҡатын көтөлмәгәнсә ғәмһеҙ ҙә, тыныс та тауыш менән. - Тәүҙә өйләнгәндәр тигән уй башыма ла инеп сыкманы. Бер мәл, уйламағанда, Өфөнән ҡатыны килде. Был уның беҙҙең ауылда тәүгә күренеүе ине. Мин шаҡ ҡаттым. Ике көн ҡайғымдан ни эшләгәнемде белмәй йөрөнөм. Хатта үлергә булып бөткәйнем. Әммә ҡатыны кире Өфөгә киткәс, күңелемдә өмөт уянды. Фәрхәт менән шул көнө үк осраштыҡ. Ул бөтәһен дә аңлатты, ҡатыны менән насар йәшәйҙәр, айырылышырға йөрөйҙәр. Ҡатыны шул хаҡта һөйләшергә килгән. Минең шатлығымды күрһәң ине! Әле генә ҡап-ҡараңғы донъя ҡапыл балҡып торған ҡояш нурҙарына күмелде. Фәрхәт минеке генә, тик минеке!.. Беҙ йәнә осраша башланыҡ. Шулай ярты йылдай ваҡыт үтте. Мин тормошомдоң рәткә һалына башлауына ҡыуанып бөтә алманым. Ошо мәлдә ауырға ҡалғаным беленде. Әммә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, миңә оҙаҡ шатланырға насип булманы. Фәрхәттең ҡатыны беҙҙең хаҡта ишетеп, тағы килеп етте. Шунан мине, өләсәйемде ныҡ итеп әрләп, Фәрхәтте алып ҡайтты ла китте...

- Ҡатыны менән айырылмағанмы ни? - тип һораны аптырауға ҡалған Айҙар, Хәкимәнең тынып ҡалыуынан файҙаланып.

- Юҡ, - тип ҡыҫҡа ғына яуапланы Хәкимә аҫҡа ҡарап ултырған көйө. Уның тауышы боҙҙай һалҡын да, вайымһыҙ ҙа ине.

- Алдағанмы ни? - Айҙарҙың йөрәгенә өшөткөс бушлыҡ солғап алды.

- Шулай булып сыға... - Хәкимә ғәжәп рәүештә тыныс ине.

Күрәһең, ошондай ҡара тойғолар кисергәндән һуң, уның йөрәге әкренләп боҙло ғәмһеҙлеккә төрөлгәндер.

Хәкимә менән Айҙар ары нимә хаҡында һөйләшергә белмәгәндәй, оҙаҡ ҡына өндәшмәй ултырҙылар. Хәкимә һағышлы үткәндәрен уйлап, ауыр хәтирәләргә бирелгәндер. Ә Айҙар, киреһенсә, ҡатындың тарихы менән сағыштырып, билдәһеҙлек пәрҙәһе менән ҡапланған үҙенең борсоулы киләсәген күҙ алдына килтерҙе. Хәкимә ана ниндәй ҡайғылар күргән, хәҙер Айҙар килеп, уны яңы бәләләргә күмергә йөрөй. Өҫтөнә михнәт артынан михнәт яуған Хәкимә егеткә шундай йәл ине. Уның тормошон еңеләйтер өсөн нисектер ярҙам итергә тейеш кеүек тойҙо үҙен, тик ниндәйерәк булырға тейеш ул - быны аңлай алмай. Етмәһә, яфа өҫтөнә яфа булып Сәкинәнең көтмәгәндә мәрхүм булыуы. Үҙенең ғәйебен тойоу Хәкимә өсөн көс етмәҫлек тағы бер оло фажиғә бит. Ошо хаҡта уйлау ғына ла егеттең йөрәген ауырттырып ебәрҙе.

Бына Хәкимә, күңелһеҙ хәтирәләрҙән ҡотолорға теләгәндәй, ауыр итеп көрһөндө лә телгә килде:

- Алты йыл үтте, тик ошонан һуң бер ир-атты ярата алмайым. Хатта күрә алмайым. Йөрәгем тунды ла ҡуйҙы...

**(Дауамы. Башы 14-се һанда).**

**✓ Өмөтлө башҡарыусыларҙы төшөрөп ҡалдырған осраҡтар ҙа була. Ошо этаптарҙы үткән кеше булараҡ, йәш йырсыларға әйтәм: иң мөһиме, халыҡ һөйөүен яуларға өлгәшергә кәрәк, бер ниндәй конкурс та халыҡ һөйөүенән юғары була алмай.**



*ИЖАДХАНА*

**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәмил Париж улы Туйсинды күптәр, әлбиттә, меңдәр араһында танырлыҡ үҙенсәлекле тауышлы йырсы тип белә. Уның виртуоз ҡурайсы, баянсы, ғөмүмән, юғары белемле музыкант, сәсәнлек мәктәбен, башҡорт халыҡ ижадын, бөгөнгө эстраданы яҡшы аңлаған белгес, педагог булыуын, әлеге көндә Сибай концерт-театр берекмәһенең ижад буйынса директор урынбаҫары булып эшләүен күптәр белеп тә бөтмәйҙер. Ҡырҡ ҡырлы, күп яҡлы һәләт күптәргә бирелмәй. Ундайҙарға тормошта күберәк йөк төшә, төрлө вазифалар, яуаплылыҡ һалына. Тәбиғәт биргән һәләттәрҙе ҡулланмау, яуаплылыҡтан ҡасыу, илгә, халҡыңа хеҙмәт итмәү хилафлыҡҡа тартым. Әңгәмәсем менән һөйләшкәндә Рәмил ТУЙСИНдың яурындары киң, күңеле саф икәненә тағы берҙе инандым.**

# ЙЫРАУСЫ ЙЫРСЫ



## Тәүге аҙымдар

Сәнғәт юлын үҙем һайламаным, ул нәҫелдән, башҡорт халҡының сәсәнлегенән, уның тарихын белеүҙән - бик төптән килә. Әҙәбиәт, тарих, сәнғәт - бер туғандар, сәсәнлектең дауамы улар. Сәнғәткә булған һөйөү әҙәбиәткә, тарихҡа ҡыҙыҡһыныу уятҡандыр, тим, сөнки аңлы рәүештә бүтән һөнәр һайлау уйымда ла булманы, иҫ белгәндән йыр-моң солғанышында йәшәнем. Алтынсы класҡа Өфөләге урта махсус музыка мәктәбенә уҡырға алдылар. Элек райондарға сығып, махсус рәүештә һәләтле балаларҙы баш ҡала мәктәбенә йыя торғайнылар. Йырлатып ҡаранылар. "Илсе Ғайса" йырын ишеттерҙем. Ул йырҙы ла аңлы рәүештә өйрәнмәгәнмен, халыҡтың сәсәнлеге ҡандан күсәлер, күрәһең, сөнки, туҡта, ошо йырҙы өйрәнәйем, тип, тыңлап ултырмағанмын бит инде. Һигеҙенсе класҡа тиклем тынлы ҡоралдар бүлегендә уҡыным. Тромбон класы буйынса уҡытыусым икенсе эшкә күсеү сәбәпле, уҡытыусыһыҙ тороп ҡалдым. Беҙҙе сәнғәт институтына әҙерләйҙәр ине.

Ҡалған ике йылда яңы инструментҡа ултырып өлгөрә алмаҫымды белдем һәм Баймаҡ интернат-мәктәбенә ҡайтырға мәжбүр булдым. Бында иһә музыка мәктәбен параллель уҡып бөттөм. Уҡытыусым булманы, сөнки баш ҡаланан әҙер ҡайтҡайным. Өфөлә лә ҡурай өҫтәмә дәрес һанала ине, әммә Юлай Ғәйнетдинов ҡурай түңәрәген алып барҙы. Ҡурайҙы, ҡурай сәнғәтенең төп өлөшөн өйрәнеп, "Һорнай" тип аталған балалар ҡурай ансамбле менән төрлө сараларҙа ҡатнашып, республика телевидениеһы аша сығыш яһағандай камилгә еткән ҡурайсылар инек. Роберт Юлдашев, мәҫәлән, шул мәктәп ҡурайсыларының береһе. Музыка мәктәбенә тиклем ҡурайҙа уйнай белмәнем, әммә уның сихри моңона ғашиҡ инем, радио аша тыңлап, ҡурайҙы сихри мөғжизә һымаҡ ҡабул итә инем. Уйнарға өйрәнеп ҡараным, әлбиттә, үлән ҡурайҙың башын ашап бөттөм дә, өйрәтеүсе остаз юҡлыҡтан, туҡтаттым. Өфөгә барғас, Юлай Ишбулды улы - математика уҡытыусыһы остазыма әйләнде, буласаҡ һөнәрем буйынса тынлы инструменттар класында уҡыу менән бер рәттән, ҡурай түңәрәгенә йөрөнөм.

## Сәнғәтме, әҙәбиәтме?

Һөнәр һайлау буйынса шулай ҙа икеләнеүҙәр булып алды, сөнки башҡорт әҙәбиәтенә лә һөйөү көслө булды (әле лә һүрелмәгән ул тойғо), шиғырҙар яҙа инем. Уҡытыусым башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса район олимпиадаһына алып барҙы. Баймаҡта ла, республика буйынса ла беренсе урын алдым. Бәйгенең шарты буйынса БДУ-ның филология факультетына имтиханһыҙ алырға тейештәр ине. Ҡайһы йүнәлеште һайларға: сәнғәтме, әҙәбиәтме? Яҙмыш үҙенсә хәл итте: мәктәпте тамамлағас та әрме хеҙмәтенә алдылар. Өс йыл Төньяҡ флотында һыу аҫты кәмәләре гарнизонында хеҙмәт иттем. Латвияның Лиепая ҡалаһында учебкала саҡта оркестрҙа уйнаным, һуңынан утрауҙағы гарнизонға килгәс, музыка ситкә күсте, моряк хеҙмәте беренсе урынға сыҡты. Учебкала саҡта һыу аҫты кәмәһенең юғары баҫымға тәғәйенләнгән май үткәргес торбаһын ҡырҡып алып, ҡурай эшләп уйнап йөрөнөм. Был да ана шул тарихты белеүҙән килә: китаптарға яҙылмаһа ла, Бөйөк Ватан һуғышы мәлендә Сарбаевтарҙың күктән бәреп төшөрөлгән немец самолеттарының еҙ көпшәһенән ҡурай эшләп уйнап йөрөгәнен ишетеп беләбеҙ бит, үҙемсә шул тарихты ҡабатланым.

Армиянан ҡайтыуым бөрйән ырыуы йыйындары башланған мәлгә тура килде, улар тәүҙә Баймаҡ районында булды, шунан Бөрйәндә дауам итте. Сәхнәгә сығып, ҡурай уйнап, "Урал"ды йырлап ебәргәйнем, сығышымдан һуң эргәмә бер ағай килде. "Мин Башҡорт дәүләт университетының Сибай филиалы вәкиле булам. Быйыл беҙҙә музыка белгестәре әҙерләүсе бүлек асыла, һине шунда саҡырам", тине. Аҙаҡ белдем, Вәкил Исмәғил улы Хажин булып сыҡты ул кеше. Ысынлап та, саҡырған һүҙендә торҙо, имтихандарға килгәйнем, сентябрҙә уҡырға килерһең, тип ҡайтарып ебәрҙе. Шулай итеп, музыка бүлегендә уҡый башланым. Юғары белемле ике һөнәр үҙләштерҙем: музыка уҡытыусыһы һәм ҡурай класы буйынса белгес. Вокал буйынса ла дәрестәр булды, әммә тауышың халыҡсан, тиеп, академик тауышҡа ҡуйманылар. Баянға килгәндә, уны үҙаллы үҙләштерҙем. Киске уйындарҙың ни икәнен белгән ауыл егете баянда, гармунда һис шикһеҙ уйнай белергә тейеш, беҙ кемдән кәм! Музыка мәктәбендә уҡығанда фортепьяно дәрестәре булды, шуға күрә, һәр төрлө музыка ҡоралында ла уйнай алам, тик ҡыллы музыка ҡоралдары менән генә ҡатмарлыраҡ, әлбиттә. Скрипка ныҡ оҡшай, бала саҡтан башҡорт моңоноң скрипкала башҡарылыуын ишетеп үҫһәм, йәбешеп ятыр инем был музыка ҡоралына.

## Ғаилә ансамбле

Педагогик белемем буйынса Сибай сәнғәт мәктәбендә оҙаҡ йылдар ҡурай буйынса уҡытыусы булып эшләнем, шунан аграр университеттың филиалында өҫтәмә һөнәрҙәр етәксеһе булдым - студенттарға төрлө йүнәлештәге һөнәрҙәр биреү ҙә шул уҡ педагогик эштең дауамы. Шулай ҙа эстрада йүнәлеше менән ҡыҙыҡһыныуым кәмемәне, был йүнәлештә лә эшләп килдем. Бынан ун биш йыл элек үҙебеҙҙең ғаилә ағзаларынан ғына төҙөлгән төркөм менән Башҡортостан буйлап һәм башҡа төбәктәрҙә гастролдәр үткәреп йөрөнөк. Сәнғәттең, ижадтың камиллығының сиге юҡ! Халыҡ араһына сыҡмаған, һәр хәлдә, сәхнәгә сыҡмаған, ишетелмәгән йырҙар менән байырға тейеш мәҙәниәт. Мәҫәлән, күңелгә ятҡан, юғары кимәлдәге берәй яңы йыр ишетһәм, шундуҡ өйрәнеп алам һәм сәхнәгә сығарам, ул тыңлаусыһын табырға, йәшәргә тейеш. Иманым камил, халыҡ араһынан сығып, сәхнәгә сыҡҡан әҫәрҙәр көслөрәк. Халыҡтың үҙендә ниндәйҙер күҙгә күренмәгән фильтрҙар аша эшкәртеүҙәр үтеп, халыҡ үҙ иткән ижадты сәхнә әҫәре итеп ҡайтарыу халыҡҡа кәрәк, башҡарыусылар быны яҡшы аңларға тейеш - йырҙар бер көнлөк булмаһын, халыҡтың ихтыяжын дөрөҫ ҡәнәғәтләндерһен.

## Һүҙ йырларға тейеш

Көй яҙыу йүнәлешенә аңлы рәүештә килдем. Музыка, белеүебеҙсә, күңел төренән сыҡҡан ижад, һәр хәлдә, шулай булырға тейеш, тип өйрәнгәнбеҙ, шулай тәрбиәләнгәнбеҙ. Был мәлде оҙаҡ көттөм, ултырып көй яҙып ҡараған саҡтарым да булды. Ижад өсөн көсләп эшләү насар нәмә, шуға бүтән тотонманым, ысын, тәбиғи рәүештә килеүен көттөм һәм бынан ун йылдар самаһы элек ошо йүнәлештә күңелгә ниндәйҙер ят ноталар, ят тауыштар килә башланы. Был һөнәргә, үҙем өсөн яңы йүнәлешкә үҙенсәлекле ҡарайым, минеңсә, көй - ул юҡтан бар ҡылыу. Бар ҡылыу бик киң төшөнсә. Көй минең өсөн тәрән мәғәнә, мондоң эсенә көйҙө, йырҙы - бөтөн нәмәне һыйҙырырға кәрәк. Был иһә бик ҡатмарлы әйбер. Осоп барғанын барыбыҙ ҙа күрә, тик кемдер тотоп ала ул нәмәне. Уны дөрөҫ ҡуллана ла белергә кәрәк, сөнки ул бөтөн килеш килмәй, өлөшләтә килә, артабан импровизация башлана. Сәсәнлек үҙе ошонан киләләр. Мәшһүр Заһир Исмәғилев әйткән бит: мин көй яҙмайым, бары халыҡ йырҙарын эшкәртәм генә. Тимәк, ҡасандыр халыҡтан сыҡҡан өлөш-өлөш булып ҡына киләләр. Ҡайһы ваҡыт көй текстан да килә, әммә һәр саҡта ла түгел. Мәҫәлән, шиғырҙы уҡып, махсус рәүештә өндәргә һалып барһаң, көй яһалмай. Ул килһә, шундуҡ килә. Ҡай берәүҙәр көй яҙырға ваҡыт юҡ, ти. Осоп барған әйберҙе мәлендә күреп, мәлендә тотоп алырға кәрәк. Ҡайһы бер йыр йылдар буйы төйнәлә, йә булмаһа, бер минутта яһала. Мин үҙем һәр саҡ тәбиғилек яҡлы, яһалмалыҡ булмаҫҡа, яңылыҡ булырға тейеш. Көйгә ҡарата айырым фекерем бар, шуға тәүгеһен иҫләмәйем, сөнки ул өлөшләтә-өлөшләтә яҙылды. Ғаилә ансамбле менән йөрөгәндә финал өсөн бер туғандар тураһында шиғыр яҙҙым һәм көйө шиғыр менән бергә килде. Сәсәндәр бит һүҙен дә, көйөн дә үҙе йырлай, тимәк, гармония булһын өсөн һүҙ йырларға тейеш, был тәбиғилектең төп шарты, шул саҡта ғына камиллыҡҡа яҡынайып була. Әле эстрадала һүҙ менән көй араһында бәйләнеш юҡ, шиғриәт менән көй бер-береһенә тура килмәй, ижадтың бөтөнлөгө юғала. Мюзикл яҙыу күптәнге хыялым ине. Был хыял оҙаҡ йәшәне һәм былтыр берекмәнең ижади миҙгелен асыуға бағышланған "Йондоҙҙар атылғанда" исемле концерт программаһына мюзикл яҙҙым. Бөгөнгө заманды һәм боронғолоҡто һаҡлап ҡалыу өсөн халыҡ ижадына таянып, бөгөнгөгә ялғап, көйҙө берләштереп, оркестрға һалып эшләнем. Мюзикл ижад итеү киләсәк өсөн ҙур мәктәп булды.

## Халыҡ баһаһы иң юғары

Төрлө конкурстарҙа ҡатнашыу тыуыҙынсы кластан уҡ башланды. Баймаҡта үткән ҡурайсыларҙың район конкурсында беренсе урын алдым, шунан Ниғәмәт ауылында үткән Кәрим Дияров исемендәге ҡурайсылар конкурсында ҡатнаштым. Шулай башланған бәйге ҡомары Хәйбуллала үткән Йомабай Иҫәнбаев конкурсына алып килде. Сирҡаныс алып, Өфөләге "Яҙғы моңдар" конкурсында икенсе урын алдым. Сибайҙағы "Ирәндек моңдары", Нефтекамалағы "Дуҫлыҡ моңо" конкурстары аша үттем. Конкурстар кешене үҫтерә, был йәһәттән бындай бәйгеләргә мөнәсәбәтем ыңғай, тик ... Башҡорт халыҡ ижадында нотаға һалынмаған әҫәрҙәр күп, белгестәрҙең тик белгестәрсә баһа биреүе генә аҙ бындай бәйгеләрҙә. Ғәҙел баһа алыу йырсы өсөн бик мөһим, сөнки сәнғәт кешеһе бик нескә була, шуға күрә лә өмөтлө башҡарыусыларҙың һәләтен һындырып ҡуймаҫ өсөн бик һаҡ, мәрхәмәтле булырға кәрәк. Өмөтлө башҡарыусыларҙы төшөрөп ҡалдырған осраҡтар ҙа була, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ошо этаптарҙы үткән кеше булараҡ, йәш йырсыларға әйтәм: иң мөһиме халыҡ һөйөүен яуларға өлгәшергә кәрәк, бер ниндәй конкурс та халыҡ һөйөүенән, баһаһынан юғары була алмай.

## Ижад һәм популярлыҡ

Әлеге эш урыным күп көс талап иткән вазифа, әммә шәхсән ижадым да дауам итә, тип әйтә алам, сөнки радио-телевидение фондында йырҙарым һаҡлана, "Ҡотлауҙар" тапшырыуы аша яңғырап тора. Халыҡ йырҙарымды ишетә, үҙем күренәм икән, тыңлаусыларым алдында бурыс атҡарам. Популярлыҡты бит төрлөсә аңларға була: кемдер башҡалар көсө менән эфир яулай, матбуғат аша үҙен яҡтырта, беҙҙең ундай әрһеҙлек юҡ, баҫалҡыбыҙ, нисек барбыҙ, үҙебеҙҙе шулай күрһәтәбеҙ, ҡалғанын халыҡ үҙе баһалай, иләк аша үткәрә, ижадым халыҡҡа кәрәк икән, үҙе популярлыҡ. Ҡапыл балҡып, юҡҡа сығыу популярлыҡ түгел, минеңсә. Ижади пландарым һәр ваҡыт бар, әлбиттә, тик төрлө юҫыҡта эшләү әҙерәк бәкәлгә һуға. Бер генә йүнәлеш буйынса барһам, ижади үҫеш көслөрәк булыр ине. Мәҫәлән, Республикабыҙҙың йөҙ йыллығына филармония йырсылары көсө менән йөҙ йырҙан торған аудиодиск сығарыу - үҙе ҙур хеҙмәт. Бер йыл ваҡытты алды, әммә һөҙөмтәһе ҡыуандыра. Уҡыу әсбабы булараҡ ҡулланғандай был яҙмаларҙың утыҙлап йырын үҙем башҡарҙым. Халҡыбыҙҙың сәнғәтенә ҙур өлөш индереүемә бик ғорурмын. Әле илле йәшкә етеп килгәндә ошо эште дауам итеп, "Илле халыҡ йыры иләмә" тигән үҙемдең башҡарыуҙағы йырҙар дискы сығарыу идеяһы менән янып йөрөйөм. Уның күп өлөшө эшләнгән дә инде. Илле йәшкә еткәндә илле халыҡ йырын белеү, миңә ҡалһа, ниндәйҙер символик мәғәнәгә эйәлер тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илле йәш ирҙәрҙең ил ағаһы булырҙай мәле. Нәҡ ошо осорға тура килә ирҙәрҙең ирмен тигән сағы, аҡылға ултырыу, аҡһаҡаллыҡ ошо нигеҙҙә күтәрелә. Урал арьяғы ир-уҙаманына ижади уңыштар теләйек!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**әңгәмәләште.**

✓ Улар һәр ваҡыт үҙе өсөн генә эшләй. Ялланып эшләгән хәлдә лә, план үтәүгә ҡарағанда, иң беренсе, үҙ мәнфәғәтен ҡайғырталар. Кем үҙе өсөн эшләмәй, ул башҡа кеше өсөн эшләй, ти улар.



ИНТЕРНЕТТАН



# АРТЫҒЫН ЭШЛӘМӘ!

■ Ғалимдар эш урынында кәрәгенән артыҡ ултырыуҙың тағы бер зыянлы яғын асыҡлаған. 11 сәғәткә һуҙылған эш көнө артыҡ ауырлыҡ, күреү һәләтенең түбәнәйеүе, иртә ҡартайыуға ғына түгел, ә депрессияға ла килтерә икән. Британия тикшеренеүселәре 5 йыл да 8 ай дауамында 2123 кешене тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. Тикшеренеүҙәр ваҡытында унда ҡатнашыусыларҙың социаль статусы, эштең ауырлыҡ кимәлен, уның күпме тәмәке тартыуын, алкоголь ҡулланыуы, ҡулланмауы, шулай уҡ илдәге дөйөм торош та иҫәпкә алынған. Ғалимдар әйтеүенсә, иҡтисади күрсәткә ҡарағанда, нормаһыҙ булған эш көнө депрессияға тиҙерәк килтергән. Стандарт ваҡыт - 8 сәғәт эшләүселәрҙән бындай хеҙмәткәрҙәрҙең депрессив төшөнкөлөк кимәле 2,3-2,5 тапҡырға юғарыраҡ булып сыҡҡан. Быны ғалимдар түбәндәгесә аңлата: бар ваҡытын эшендә үткәреүселәрҙең ғаиләһенә һәм төп рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә ваҡыты ҡалмай. Бынан тыш, гел көсөргәнештә булыу ҡанда стресс менән кортизол гормоны кимәлен күтәрә. Ул үҙ сиратында иммунитетты түбәнәйтә һәм ҡан баҫымын күтәрә.

■ Гарвард университеты белгестәре пластик ҡалдыҡтарҙы утилләштереү проблемаһын хәл итеү маҡсатынан аҙыҡ-түлек өсөн бик үҙенсәлекле - ашарға яраҡлы ҡаптар уйлап тапҡан. Аҙыҡ өсөн тәғәйенләнгән ашарға яраҡлы һауыттар WikiCells тигән атама алған. Улар тарҡала торған полимерҙарға аҙыҡ-түлек өҫтәмәләре ҡушып яһалған йоҡа ғына аҙыҡ мембранаһынан тора. Һыуланмай торған булыуҙары арҡаһында был һауыттарҙа шыйыҡ аҙыҡ-түлек тә яҡшы һаҡлана. Ҡаптың тәме булыуы ла, булмауы ла бар. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта ғалимдар әфлисун һуты менән мембрана яһаған - әфлисун еҫе сығып торған был һауытта аҙыҡтар ҙа сифатлы һаҡлана. Тик белгестәр әйтеүенсә, ҡаптың үҙе лә аҙыҡ булыуын онотторға ярамай, уның да боҙола башлауы ихтимал. Был үҙенсәлекле асыш авторҙары тиҙҙән ошондай ҡаптар магазин кәштәләренән пластик ҡаптарҙы ҡыҫырыҡлап сығарасаҡ, тип ышана. Әйткәндәй, бындай ҡаптар аҙыҡ-түлек етештереүселәргә күпмегә төшәсәге билдәһеҙ.

■ Пассив тәмәке тартыу күп ауыр сирҙәр барлыҡҡа килтерә. Иң хәүефле төркөмгә иң тәүҙә балалар инә, ти белгестәр. Яңыраҡ ғалимдар тағы ла бер асыш яһаған. Цинциннати университеты хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ғаиләлә бәләкәй саҡтан тәмәке төтөнө һуларға мәжбүр булған балаларҙың ете йәштә үпкә сирҙәренә дусар булыуы теркәлгән. Етмәһә, улар аллергияға тиҙерәк бирешеп бара. Атаһы, әсәһе йәки башҡа ғаилә ағзалары тәмәке тартыуы һөҙөмтәһендә ҡыҙҙарҙың үпкәләре малайҙарҙыҡына ҡарағанда 6 тапҡырға насарыраҡ эшләүе лә билдәле булған. Бигерәк тә 4 йәшкә тиклемге балаларҙың сәләмәтлегенә тәмәке төтөнө күберәк зыян килтерә икән.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

ҺАБАҠТАР

# ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨҮ ҘӘ КӘРӘК...



**Беләһегеҙме икән, апрель башында Халыҡ-ара ҡоштар һәм Көлкө көнөнән тыш, Эшкә йәйәү бара торған көн дә теркәлгәйне. Ошондай үҙенсәлекле дата барлығын мин үҙем дә былтыр ғына ишеткәйнем.**

Ғәҙәттәгенән алдараҡ сыҡҡайным ул көндө. Туҡталышта бер үҙем һерәйеп торам. Шул саҡ тротуарҙа оло йәштәге танышым, дөрөҫөрәге, элекке күршем ҡул болғаны. Уны күреүемә, әлбиттә, тәүҙә ышанманым. Сөнки уны яман сир аяҡтан йығыуын, терелеүенә өмөт юҡ, тип, дауахананан ҡайтарып ебәргәндәрен ишеткәндән һуң башҡа осратҡаным булмағайны. Минең ғәжәпкә ҡалыуымды, әлбиттә, һиҙмәне түгел. Йылмайып:

- Байрам менән! - тине.

- Һине лә! - тинем, шаярта торған көндө күҙ уңында тотоп.

- Бөгөн - минең өсөн Яңы йыл, тыуған көнөм кеүек иң яҡын байрамдарҙың береһе, - ти.

- Мин дә яратам 1 апрелде, - тием. - Бигерәк тә береһен төп башына ултыртырға тура килһә...

Минең Көлкө көнө тураһында әйткәнде аңланы танышым, әммә төҙәтеп маташманы.

- Атлай алмай башлағас, планшетымды ҡулыма алам да, көнө буйы интернет киңлектәрен гиҙә торғайным. Ауырыуын биргәс, дауаһы ла барҙыр бит инде, тип, төрлө халыҡ ысулдарын уҡыйым, өйрәнәм, - тип һөйләп алып китте ул. - Көндәрҙән бер көндө Эшкә йәйәү бара торған көн барлығы хаҡында мәғлүмәткә юлыҡтым. Ҡайһы бер илдәрҙә, мәҫәлән, Австралияла апрелдең тәүге аҙнаһында уның хатта милли байрам булараҡ билдәләнгәненен уҡып, үҙемсә ҡыҙыҡ күреп, көлөп тә алдым. Был үҙенсәлекле датаның башҡа дәүләттәрҙә лә барлығын, тик башҡасараҡ аталғанын, уларҙың хөкүмәт кимәлендә үткәрелгәндәрен ҡыҙыҡһынып уҡыным һәм... үҙемдең бер ҡасан да йәйәү йөрөмәгәнлегем тураһында асыш яһаным...

Танышым һөйләүен дауам итте. Ике айҙан апрель тыуа тигәндә, Рәзилә Мәхийән ҡыҙы Ишмырҙина үҙенә һүҙ бирә: "Йығылып, әҙәм көлкөһөнә ҡалһам ҡалам, үлһәм үләм, әммә 1 апрелдә, Эшкә йәйәү бара торған көндә, аяҡҡа баҫып, урамға сығасаҡмын...". Яҡындары, әлбиттә, уға тәүҙә шикләнеп ҡарай. Ауырыуының ахырғы сигенә етте шикелле, аҡылы буталана башланы, тип тә уйлағандар башта. Шулай ҙа һуңғы үтенеселер, бәлки, тиеп, уға тотоноп йөрөй торған дүрт тояҡлы махсус ҡорамал һатып алып бирәләр.

Яңы тәпәй баҫа башлаған балаға ниндәй ҡаршылыҡтар, ауырлыҡтар осраһа, Рәзилә апайға ла уларҙың барыһын да үтергә тура килә.

- Нисек кенә булмаһын, әйткән һүҙемдә торҙом. Шулай, 1 апрелдә ҡаланың үҙәк урамынан йәйәү китеп барһам, Новосибирскиҙа йәшәгән ейәнсәрем шылтыратты. Ленин урамынан киләм, тигәс, Көлкө көнөндә мин уны шаярта тип ҡабул итеп, көлгән булды, ә һуңынан ултырып илаған. Мин үҙем дә берсә көлә-көлә, берсә илай-илай йөрөп ҡайттым, - ти Рәзилә Мәхийән ҡыҙы.

Йәйәү йөрөүҙең бөтә ауырыуҙарға ҡаршы дауаһын Рәзилә апайҙан да күберәк белгән кеше юҡтыр хәҙер. Тәү сиратта, кешенең кәйефен күтәреүен билдәләй. Кәйеф күтәренкелеге иһә иммунитеттың ныҡлығын тәьмин итә.

Мәғлүм булыуынса, бөгөн күптәрҙең эше компьютер менән бәйле. Был, тимәк, көнө буйы, йәғни 8 сәғәт өҫтәл артында ултырыу тигәнде аңлата. Шуға күрә эшкә барғанда һәм ҡайтҡанда йәйәү йөрөргә ҡуша Рәзилә апай.

- Көн һайын мөмкинлегегеҙ булмаһа, исмаһам, көн аша эшкә атлап барығыҙ, атлап ҡайтығыҙ. Йәйәү йөрөү - ул ауыр эш көнөнән һуң психологик һәм мускулдар көсөргәнешен кәметеүсе иң яҡшы сара. Физик әүҙемлекте күтәреүҙең, иммунитет һәм нервы системаһын нығытыуҙың ябай һәм арзанлы ысулы. Махсус спорт залында шөғөлләнеү ҙә кәрәкмәй. Артыҡ ауырлыҡтан, һимереүҙән һаҡлай, кәүҙәнең һығылмалылығын арттыра, йөрәк эшмәкәрлеген көйләй. Мин үҙем һауа торошоноң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, көн һайын 5-6 саҡырым үтәм. Ә апрелдең беренсе аҙнаһында унар километр үтергә һүҙ бирҙем үҙемә, - ти ул.

Әйе, календарҙа кешеләр үҙҙәре уйлап тапҡан ғәҙәти булмаған, хатта сәйер тойолған, сәйер яңғыраған байрамдар байтаҡ. Әммә нисек кенә булмаһын, улар беҙгә көндәлек тормошобоҙға икенсе күҙлектән ҡарарға, уға ниндәйҙер яңылыҡ индерергә, ыңғай тәьҫорат өҫтәргә булышлыҡ итә. Ә ҡайһы берҙәре, Рәзилә апай Ишмырҙина миҫалындағы кеүек, яңы маҡсаттар билдәләргә этәргес тә була.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

# НИ ӨСӨН ЙӘҺҮДТӘР БАЙ?



**Билдәле булыуынса, миллиардерҙар һәм Нобель премияһы лауреаттарының яртыһы - йәһүдтәр. Бында антисемитизмдың да роле бик ҙур. Ҡыуылыуға, иҙелеүгә дусар булған халыҡ тере ҡалырға, йәшәргә, күтәрелергә тырыша. Бының өсөн улар икеләтә күберәк эшләргә, иң алдынғылар сафында булырға ынтыла. Был халыҡ белем алыуға өҫтөнлөк бирә. Бына ни өсөн йәһүдтәр һәр ваҡыт уҡый һәм юғары маҡсат ҡуя. Балаларына ниндәй идеялар һалыуын белер өсөн уларҙың мәҡәл-әйтемдәренә иғтибар итәйек әле.**

***"Диңгеҙҙән бер көршәк һыу алһаң, ул кәмемәйәсәк".***

Башҡа милләттән айырмалы, йәһүдтәр байлыҡтан ҡурҡмай һәм бик һирәктәр генә мullыҡта йәшәй ала, тип уйламай. Улар аҡса барыһына ла етеүенә ышана һәм һәр кеше бай булһа ла, аҡса бөтәһенә лә етә, тигән фекерҙә.

***"Аллаһ ярлыны яратһа, ул ярлы булмаҫ ине".***

Был әйтем йәһүдтәрҙең байлыҡты насар тип уйламауын күрһәтә. Беҙҙең күбебеҙ тиерлек байҙар енәйәтсе, ҡәбәхәт, уғры, тип уйлай. Тап бына шуның өсөн дә күптәр, ярлы йәшәһәм йәшәйем, намыҫым таҙа булыр, ти. Йәһүдтәр иһә байлыҡтың насар яғын күрмәй.

***"Теләк теләп кенә бай булып булмай".***

Йәһүдтәрҙең тағы бер айырылып торған сифаты - уңғанлыҡ. Улар аҙ һөйләй, күп эшләй. Яҡшы тормош хаҡында хыялланыу насар түгел, әммә уның өсөн үҙеңә көсәнергә кәрәклеген белә. Был темаға тағы ла "Әгәр ҙә доға ярҙам итһә, кешеләр үҙҙәре өсөн доға ҡылырға башҡаларҙы яллар ине", тигән мәҡәлдәре бар.

***"Бәләкәй кешеләр менән дуҫлашығыҙ, улар һеҙгә өҫкә күтәрелергә ярҙам итер".***

Уңышлы һәм файҙалы дуҫтар булдырыу - күпселек йәһүдтең айырылғыһыҙ сифаты. Ни тиһәң дә, кешене уның янындағылар "кеше" итә. Эргәләге уңышлы, бай шәхестәр юғары маҡсат ҡуйып эшләргә этәрә. Бәләкәй танышлыҡтар булдырырға ла тырыша улар. Кем белә, бәлки, уларҙың да файҙаһы тейеп ҡуйыр...

***"Кем йүгән кейә, ҡамсыһын да тотаясаҡ".***

Улар һәр ваҡыт үҙе өсөн генә эшләй. Ялланып эшләгән хәлдә лә, план үтәүгә ҡарағанда, иң беренсе, үҙ мәнфәғәтен ҡайғырталар. Кем үҙе өсөн эшләмәй, ул башҡа кеше өсөн эшләй, ти улар.

***"Ун аҡыллы кеше һатҡанды бер ахмаҡ һатып ала".***

Аҡсаны юҡ-барға тотонмай улар. Йәһүдтәрҙең һаранлығы тураһында фекер нығынған. Әммә улар быны "экономиялау" тип атай. Юҡ-барға аҡса сарыф итеүҙе аҡылһыҙлыҡ билдәһе, ти улар.

***"Атаһы йыйғанына балаһы йәшәй".***

Улар бер көн менән йәшәмәй. Киләсәк быуынын хәстәрләү - йәһүдтәрҙе айырып торған тағы бер һыҙат. Бына ни өсөн йәһүд ҡатындары еңеүселәрҙе һәм геройҙарҙы тәрбиәләй. Бөтә атайҙар балаһының ғына түгел, ейәндәренең киләсәге өсөн тырыша.

***"Аҡсаң булмаһа - ялҡауланма, булһа - маҡтанма".***

Йәһүдтәрҙең ни тиклем бай икәнлеген бер кем дә белмәй. Улар был хаҡта бер кемгә лә бер нәмә лә әйтмәй. Башҡаларҙа көнсөллөк хисе тыумаһын өсөн байлыҡтарын күрһәтмәйҙәр.

**Ошоларҙан ниндәйҙер һығымта яһап буламы?**

✓ ***Кемдер: "Әгәр башың - күктә, аяғың ерҙә икән, уларҙы бергә тоташтыр", - тигән. Мин быны менән килешмәйем. Һеҙ былай ҙа "тоташҡанһығыҙ", һеҙҙең Илаһ менән бәйләнешегеҙ бар.***



*БАҠСА*

# ТИР СЫҒАРЫР МӘЛ

**Апрелдә өйҙәге йәшелсә һәм сәскә үрсетмәләрен тәрбиәләүгә баҡсалағы мәшәҡәттәр ҙә өҫтәлә. Эште нимәнән башларға? Һәүәскәр баҡсасы Гүзәл Кәримованың кәңәштәренә ҡолаҡ һалығыҙ.**



- Иң беренсе, баҡсаны былтырҙан ҡалған сүп-сарҙан, мульча ҡалдыҡтарынан, ағас-ҡыуаҡ япраҡтарынан таҙартығыҙ. Ҡаплап ҡуйған үҫентеләрҙең япмаһын асып еләтегеҙ, әммә көн һыуыҡ торһа, уны тулыһынса алырға ашыҡмағыҙ.

Гөрләүектәр ағыуы күңелле күренеш булһа ла, уның баҡса аша үтеүе бик үк яҡшы түгел. Ҡар һыуы тупраҡтың файҙалы элементтарға бай өҫкө өләшөн йыуып алып китмәһен өсөн ваҡытында сараһын күрегеҙ. Ҡар һыуы ҡурай еләге, баҡса еләге үҫкән урындарҙа оҙаҡ йыйылып тороуына юл ҡуймағыҙ, улар артыҡ дым яратмай. Киләһе уңышҡа кире йоғонто яһауы мөмкин.

Көн йылыһына, клематис, роза, лилиәләрҙе көҙҙән япҡан булһағыҙ, асып ҡуйығыҙ. Юғиһә, йылы урында үҫеп китеүҙәре бар, аҙаҡ һыуыҡҡа тиҙ бирешерҙәр. Яҙ төрлөсә килә, йылдыҡы йылға тура килмәй. Шуға күрә һауа торошон күҙәтеп барығыҙ. Тупраҡ йылынғанын тойһағыҙ, һыуыҡтан ҡурҡмай торған бер йыллыҡ сәскәләр ултыртығыҙ. Мин үҙем йыл һайын космея, бәрхәт һәм тырнаҡ (календула) гөлдәре сәсәм. Улар үҫеп тора, сәскәгә бөрөләнә бара.

Гладиолус, ләлә кеүек сәскәләрҙе көн йылынғас апрель аҙағында уҡ баҡсаға сәсергә мөмкин. Тупраҡҡа ултыртыр алдынан "Фитоспорин" менән эшкәртегеҙ.

Йыш ҡына, картуф шытмай, тип аптыраған-дарын ишеткәнем бар. Уның сәбәбе, ғәҙәттә, орлоҡто баҙҙан алғас та сәсеүгә бәйле. Мин апрель урталарында уҡ мөғәрәптән сығарып, йылы урынға "күҙләндерергә" һалам. Шулай иткәндә, ул тиҙ шытып сыға. Ҡоро килгән йәйҙә был бигерәк тә актуаль.

Майҙа беҙҙең яҡта ҡырау төшә. Шуға күрә көн һалҡынайтҡанда бер йыллыҡ сәскәләрегеҙҙән, баҡса еләктәренең өҫтөн ҡаплағыҙ. Емеш ағастары сәскә атҡанда ҡырау зыян итмәһен өсөн элегерәк уларҙың янында үҫемлек ҡалдыҡтарын яндыра торғайным. Шулай иткәндә төтөн уларҙы һалҡындан һаҡлай ине. Был осраҡта, әлбиттә, үҙеңә лә йоҡо эләкмәй, сөнки янған, төтәгән усаҡты ҡарауһыҙ ҡалдырырға ярамай.

Апрелдә бүлмә гөлдәре лә иғтибарға мохтаж. Уларҙың ерен алмаштырыу, тамырына зыян итмәй генә күсереп ултыртыу, махсус ашлама менән ашлау мөһим. Ҡояшлы, ҡоро көндә уларға һыуҙы күберәк һибегеҙ.

**Ләйсән СӘЛИХОВА яҙып алды.**

**Әйткәндәй, баҡсанан ҙур уңыш алырға теләһәгеҙ, ошо 8 кәңәште иҫтә ҡалдырығыҙ:**

- барлыҡ йәшелсәләргә лә һыу һипкәндә нишатыр спирты ҡушып һибергә (10 литр һыуға 2 аш ҡалағы);
- 100 грамм сөпрәне 10 литр һыуҙа иретеп һипһәң, йәшелсәләр гөрләп үҫә;
- сөгөлдөр баллы булһын өсөн, һирәклә гәс, аш тоҙо иретмәһе һибергә (10 литр һыуға бер стакан). Был кишер, һуған, һарымһаҡ өсөн дә бик файҙалы;
- помидорҙарҙы фитофтороздан һаҡлар өсөн һөт йәки эркет һыуына (сыворотка) бер тамсы йод тамыҙып һибергә кәрәк;
- помидор һәм ҡыярҙарға 10 литр һыуға 20 тамсы йод ҡушып яһалған шыйыҡсаны вегетация осоронда бер нисә тапҡыр һипһәң, бөрөләре күбәйә һәм ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлығы арта;
- һуған көпшәләнмәһен өсөн ултыртыр алдынан сәй содаһы иретмәһенә һалып торорға кәрәк. Бер литр һыуға бер балғалаҡ сода алына;
- еләктәргә сәскә атыр алдынан йод иретмәһе һибегеҙ. 10 литр һыуға - 10 тамсы;
- йод иретмәһен шулай уҡ кәбеҫтә лә бик ярата. Сәкән яһала башлағанда һибеү яҡшыраҡ. 10 литр һыуға - 40 тамсы.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ИЗГЕ ЭШТӘРЕҢ...

## тау тишегенән дә ҡотҡарыр



**Бер ваҡыт өс йәш ир-егет сәфәргә сыға. Юлда көслө ямғыр башлана. Егеттәр яҡын-тирәләге тау мәмерйәһенә йәшенергә була. Ямғырҙан ҡотолдоҡ ҡына тигәндә, ҡапыл ҡая башынан таш төшөп, мәмерйә ауыҙын ҡаплай.**

Егеттәр ҡаушап ҡала, ләкин имандары уларға тыныслыҡ һаҡларға ярҙам итә. Берәүһе: "Дөрөҫлөк һәм ихласлыҡтан башҡа беҙҙе бер нәмә лә ҡотҡара алмай. Шуға, әйҙәгеҙ, Хоҙайҙан ярҙам итеүен һорайыҡ. Сөнки беҙ һәр ваҡыт намыҫлы булдыҡ. Ауыр хәлдә лә иман нурын һүндермәнек. Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп, унан изге эштәребеҙ өсөн беҙҙе кисереүен үтенәйек", - тип тәҡдим итә.

Һәм ир-егеттәрҙең береһе доға уҡып, шулай ти: "Эй, Хоҙайым. Минең атам-әсәм инде ҡартайған. Аш мәлендә улар ризыҡланып бөтмәйенсә, балаларыма һәм ҡатыныма өҫтәл артына ултырырға рөхсәт итмәйем. Бер саҡ мин алыҫ урманда мал көттөм. Өйгә һуң ғына ҡайтып ингәндә, атай-әсәйемдең йоҡларға ятҡанын күрҙем. Улар йоҡонан уянмайынса, үҙем менән алып килгән ризыҡты өйҙәгеләргә бирмәй торҙом. Эй, Хоҙайым. Әгәр ҙә минең был ҡылығым Һинең тарафтан хуплау тапҡан икән, беҙҙе ошо бәләнән ҡотҡарсы". Был һүҙҙәрҙән һуң таштың бер бәләкәй киҫәге ярылып төшә. Әммә мәмерйәнән сығыу мөмкинлеге булмай.

Икенсе егет Хоҙайҙан шулай тип үтенә: "О, Аллаһым. Мин туған кешемдең - бабайымдың ҡыҙына ғашиҡ булдым. Уны һөйөп, иң көслө мөхәббәт утында яндым. Уның менән бергә булырға теләнем, ләкин ул минең тәҡдимде ҡабул итмәне. Йылдарҙың береһендә уңыш унманы. Ғаиләһен аслыҡтан ҡотҡарыр өсөн был ҡыҙ минә ярҙам һорап килде. Мин уға, әгәр ҙә минең менән булһаң, етерлек аҡса бирәм, тинем. Уның башҡа әмәле юҡ икәнен белә инем. Шул саҡ ул, Хоҙайҙан ҡурҡ, гонаһ ҡылыуҙан тыйыл, тине. Ғишыҡ тойғоларым көслө булһа ла, Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыуым көслөрәк булып сыҡты. Һәм ҡыҙға теймәйенсә, уға бөтә булған аҡсамды биреп сығарҙым. Эй, Хоҙайым! Әгәр ҙә был ҡылығымды ҡабул итһәң, беҙҙе бәләнән ҡотҡар". Таштың тағы бер киҫәге ярылып китә. Ләкин барлыҡҡа килгән ярыҡтан сығырлыҡ булмай әле.

Шунан өсөнсө егет доға уҡый башлай: "Эй, Хоҙайым! Мин үҙемә бер нисә хеҙмәткәр алдым һәм уларға эш хаҡы тәғәйенләнем. Бер аҙҙан бер хеҙмәткәрем минән китте, әммә тейешле эш хаҡын алманы. Уның аҡсаһын мин кәсебемдә үҫтереүҙә файҙаландым. Бер нисә йылдан һуң минә шул кеше осраны һәм эш хаҡын түләүҙе һораны. Шул саҡ мин уға: "Ошо дөйә, үгеҙ һәм һарыҡҡа күҙ һал. Уларҙы мин һинә тейешле булған аҡса менән һатып алдым. Шуның өсөн ул хайуандар хәҙер һинеке", - тинем. Ул бик аптыраны, мине шаярта тип уйланы. Һүҙҙәремдең эскерһеҙ икәнен белгәс, мөлкәтен алып, үҙ юлында булды. Эй, Хоҙайым, әгәр был ҡылығымды изге тип һанаһаң, ҡотҡар беҙҙе". Шул мәлдә күҙгә күренмәгән көс ташты ситкә этәрә. Егеттәр Хоҙайға рәхмәт әйтеп, мәмерйәнән сыға һәм юлдарын дауам итә.

Бәйғәмбәребеҙ сәхәбәләргә был фәһемле тарихты йыш һөйләй торған булған. Йәнебеҙ хазинаһында Хоҙай хуплаған эштәр күберәк булырға тейеш. Изге эштәребеҙҙе телгә алып, беҙ доға ҡыла алаҫаҡбыҙ. Изге эштәребеҙ өсөн Аллаһы Тәғәлә беҙҙе бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап торор.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

**Фекерҙе саҡ ҡына үҙгәртһәк...**

Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоп, тыныс картинаны күҙ алдына килтерегеҙ. Һуңынан раҫлауҙы инҡар итеү менән алыштырығыҙ. Уйығыҙҙан ғына "Мин шундай-шундай" урынына: "Мин хәҙер ундай түгел", - тип ҡабатлағыҙ.

Ваҡыты-ваҡыты менән быудай раҫлауҙы рухи һәм физик яҡтан нығытығыҙ: көсөргәнештән арынып, аффирмацияны ҡабатлағыҙ, һуңынан ыңғай фекерләүегеҙҙе билдәләүсе ғәмәлдәр эшләгеҙ. Хәҙер уларҙың ҡайһы берҙәре сәйер күренер, әммә үҙ-үҙегеҙгә раҫлауҙан һуң уларҙың мәғәнәһен аңларһығыҙ:

- ресторанда кем өсөндөр түләгеҙ;
- көтөп торорға мөмкин булған иҫәпте алдан түләп ҡуйығыҙ;
- "сәйлек"те мул бирегеҙ;
- яңы эшләпә йәки галстук һатып алығыҙ;
- мәрхәмәтлек өсөн аҡса бирегеҙ;
- икенсе кешенең финанс уңышы тураһында маҡтау һүҙҙәре әйтегеҙ.

Әгәр быларҙы үкенесһеҙ эшләй алмаһағыҙ, тимәк, һаман да Йыһан байлығына үҙегеҙҙең юлығыҙҙы картәләйһегеҙ. Тағы ла бер ҡат үҙегеҙ менән һөйләшегеҙ, йәғни көсөргәнештән арынып, ыңғай аффирмацияларҙы ҡабатлағыҙ.

**Нисек үҙеңде бай булырға өгөтләргә?**

Көсөргәнештән арынып һәм күҙҙәрегеҙҙе йомоп, үҙегеҙгә нығыраҡ тәьҫир иткән аффирмацияны ҡабатлағыҙ. Уны бер нисә көн дауамында көнөнә бер нисә тапҡыр эшләгеҙ:

Хәҙер әйтәсәк һүҙҙәрем миңә сәләмәтлек, бәхет һәм уңыш алып килә. Мин үҙемдә Илаһҡа ижади канал рәүешендә күрһәтәм.

Мин үҙемдә тормош байлығы сағылыштарына - Илаһҡа тоғролоғомдоң туранан-тура әҙемтәһенә бағышлайым.

Мин аҡыллыларҙың-аҡыллыһы, бөтөн нәмә ҡулымдан килә, көслөләрҙең-көслөһө, сөнки мине сикһеҙ аҡыл йүнәлтә һәм Илаһи мөхәббәт хуплай.

Аффирмацияларҙың береһен һайлап алып, уны иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ һәм көсөргәнештән арынып, өс тапҡыр ҡабатлағыҙ.

Йыһан, һеҙ тормошоғоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тырышҡан һайын, ҡул саба: күңелле тап килеүҙәр, синхронлыҡ, бәләкәй "мөғжизәләр" менән осраша башлайһығыҙ. Уларҙы Илаһ эшләй. Тап килеү - уның йәшереп кенә башҡарған ваҡиғаһы. Бынан тыш, һеҙҙең яҙып та, һөйләп тә аңлатып булмаған рухи кисерештәрегеҙ барлыҡҡа киләсәк.

Кемдер: "Әгәр башың - күктә, аяғың ерҙә икән, уларҙы бергә тоташтыр", - тигән. Мин быны менән килешмәйем. Һеҙ былай ҙа "тоташҡанһығыҙ", Һеҙҙең Илаһ менән бәйләнешегеҙ бар. Уйығыҙҙа ғына уның менән һөйләшеү ҙә һеҙгә көн һайын байлыҡ килтерә.

Джолиға 23 йәш булғанда ул ҡунаҡхана хужаһы була, әммә бөлә. Интуитив рәүештә ул үҙенең был финанс уңышһыҙлығының тормошон мәңгелеккә боҙоуына юл ҡуймаҫҡа тейешлеген аңлай. Көсөргәнештән арынып, үҙен ыңғайға көйләй башлай.

Һуңынан "Сильва ысулы: етәкселәр өсөн үҙең өҫтөнән власть" тигән китап уҡый. Тиҙҙән ул һатыу буйынса директор урынын биләй һәм, китапта бирелгән кәңәштәр ярҙамында һатыусыларҙың көслө төркөмдәрен ойоштора башлай.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 18 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

4.54 Профилактика на канале с 04:54 до 10:00.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Жизнь заново". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7:00 до 14:00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Т/с "Котовский". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 "Бесприданница". [12+]**
**5.15 Мы дети войны. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 19 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Жизнь заново". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "У дачи". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [0+]**
**21.00 Ныҡ бул. [6+]**
**22.00 Пером и оружием. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Котовский". [16+]**
**2.45 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**

## 20 АПРЕЛЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Жизнь заново". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "У дачи". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Т/с "Котовский". [16+]**
**2.45 Спектакль "Караул, тещу украли!". [12+]**
**4.30 Әлләсе... [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 21 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Жизнь заново". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Т/с "Котовский". [16+]**
**2.45 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 22 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Х/ф "Мирт обыкновенный". [12+]
3.20, 4.10 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/с "Год на орбите". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 3.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.00 Автограф. [12+]**
**14.00 "Хазина". [0+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 5.00 Тормош. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 БашГост. [12+]**
**23.30 Т/с "Лето волков". [16+]**
**1.45 Спектакль "Весело живем". [12+]**
**5.30 Мы дети войны. [12+]**
**5.45 Д/ф "Конная гвардия: умирает, но не сдается..." [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 23 АПРЕЛЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.15, 20.00, 1.00 Вести.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.50, 4.15 Х/ф "Родная кровиночка". [12+]
15.00 Схождение Благодатного огня. Прямая трансляция из Иерусалима.
16.15 Х/ф "Нужна невеста с проживанием". [12+]
18.10 Привет, Андрей! [12+]
21.30 Х/ф "Иван Денисович". [16+]
23.10 Х/ф "Семейное счастье". [12+]
1.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Сыны Отечества". [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.45 "Елкән". [6+]**
**10.15 "КультУра". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Тотальный диктант. Башкирский язык.**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские народные песни. [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Д/ф "Пасха". [6+]**
**23.45 Пасхальная служба из кафедрального собора Рождества Богородицы г. Уфы.**
**2.45 Т/с "Лето волков". [16+]**
**4.30 "Море мечты". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 24 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.56, 4.55 Перерыв в вещании.
6.00, 3.15 Х/ф "Молодожены". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.55 Х/ф "Дорогая подруга". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Северное сияние". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона. [0+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз)./. [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Д/ф "Женское лицо Победы". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 3.00 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Золотые страницы башкирской классики. [12+]**
**19.00 "Путь к храму". [0+]**
**19.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 Т/с "Лето волков". [16+]**
**0.45 Спектакль "Часы с кукушкой". [12+]**
**3.30 "Млечный путь". [12+]**
**4.30 Д/ф "Они верили в Победу". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 апрель "Балам"** (В. Емелева), спектакль-терапия. 16+
**23 апрель "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт тарихы. 18.00 16+
**24 апрель "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 апрель Премьера! "Мөхәббәт тураһында легенда"** (Н. Хикмәт). 12+
**22 апрель "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**
**Тыва дәүләт ҡурсаҡ театры гастролдәре:**
**22 апрель "Я - Будда!"** (В. Хаптаханов). 19.00 16+
**23 апрель "Иссумбоси"** (А. Чадамба). 12.00, 14.00, 16.00 0+
**24 апрель "Рикки-тикки-тави"** (М. Горская). 12.00, 14.00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 апрель "Времена года. П.Чайковский и А. Вивальди"**. 6+
**21 апрель "Сағылыш"** Диана Ишниязова концерты. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**23 апрель "Эх, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+
**24 апрель "Килдең, киттең - хуш, байғош..."** (М. Задорнов), лирик комедия. 18.00 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**18 апрель "Сказка о царе Салтане"** (А.С. Пушкин), әкиәт. 12.00 0+
**19 апрель "Көтмәгәндә булған хәл"** (Э. Йәһүҙин), комедия. 16+
**23 апрель "Золотой цыпленок"** (В. Орлов), әкиәт. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драмаһы менән
**18 апрелдә** - Баймаҡ р. Ниғәмәт ауылында, **19 апрелдә** - Әбйәлил р. Ташбулат ауылында, **20 апрель** - Баймаҡ р. 2-се Этҡол ауылында, **21 апрель** - Әбйәлил районы Байым ауылында гастролдәрҙә. Спектаклдәр киске сәғәт 8-ҙә башлана. 12+

**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедияһы менән Әбйәлил районы буйлап гастролдәр:
**18 апрель** - Асҡар район мәҙәниәт һарайында, **19 апрель** - Ҡужан, **20 апрель** - Тупаҡ, **21 апрель** - Сиҙәм, **22 апрель** - Йәнгел, **23 апрель** - Йәлембәт ауылдарында. Спектаклдәр киске сәғәт 8-ҙә башлана. 12+

**"Ҡар аҫтында ҡайнар шишмә"** (А. Ғиләжев) мелодрамаһы менән Хәйбулла районы буйлап гастролдәр:
**18 апрель** - Өфө, **19 апрель** - Бүребай, **20 апрель** - Йәнтеш, **21 апрель** - Байғусҡар, **22 апрель** - Мәмбәт, **23 апрель** - Вәлит, **24 апрель** - Быҙаулыҡ ауылдарында. Спектаклдәр киске сәғәт 8-ҙә башлана. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| (Апрель - Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (17) дүшәмбе | 4:08 | 4:38 | 6:08 | 13:30 | 18:08 | 20:23 | 21:53 |
| 19 (18) шишәмбе | 4:06 | 4:36 | 6:06 | 13:30 | 18:09 | 20:25 | 21:55 |
| 20 (19) шаршамбы | 4:04 | 4:34 | 6:04 | 13:30 | 18:10 | 20:27 | 21:57 |
| 21 (20) кесе йома | 4:01 | 4:31 | 6:01 | 13:30 | 18:12 | 20:28 | 21:58 |
| 22 (21) йома | 3:59 | 4:29 | 5:59 | 13:30 | 18:13 | 20:30 | 22:00 |
| 23 (22) шәмбе | 3:57 | 4:27 | 5:57 | 13:30 | 18:14 | 20:32 | 22:02 |
| 24 (23) йәкшәмбе | 3:54 | 4:24 | 5:54 | 13:30 | 18:15 | 20:34 | 22:04 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БӨЙӨК ДАЛА СЕРЕН АСА...

**Үткәнен белергә теләгән, өйрәнгән халыҡ хәтерле. Сөнки ул тарих төпкөлдәренә алып киткән тамырҙарынан һутланып, теремекләнеп, бөгөн донъяла тотҡан урынын баһалай ала. Төрки халыҡтарының да үҙҙәре үткән юл менән ҡыҙыҡһыныуы көсәйә генә бара, айырыуса, археологтарҙың һөҙөмтәле эшләүен әйтергә кәрәк. Инде саңға күмелгән тарихты тергеҙә һәм үткәндәргә киңерәк ҡараш ташларға ярҙам итә улар.**







Республиканың Милли музейында "Бөйөк дала: Арауыҡ. Ваҡыт. Мәҙәниәт" тип аталған үҙенсәлекле күргәҙмә менән барып танышҡандан һуң, ошо фекер тағы ла нығый төштө. Республикабыҙ өсөн ҙур мәҙәни яңылыҡ, һөйөнсө - Ҡаҙағстандың Милли музейы фонды Евразияның дала мәҙәниәтен, йолаларын һәм инаныуҙарын сағылдырған ҡыйбатлы ҡомартҡылар алып килде. Әле генә асылған күргәҙмәлә үткән дәүерҙәрҙең оҫталары эшләгән биҙәнеү әйберҙәре, ҡорамалдары, дөрөсөрәге, шуларҙың 125 дананан торған ҙур булмаған бер өлөшө тәҡдим ителә. Залға килеп инеү менән иғтибарҙы иң элек Ҡаҙағстандың символына әүерелгән "Алтын кеше" йәлеп итә. Был бер ҙә юҡҡа түгел, сөнки "Бөйөк дала: Арауыҡ. Ваҡыт. Мәҙәниәт" рухи-тарихи сараһы Халыҡ-ара "Алтын кешенең донъя музейҙары буйлап үтеүе" проекты эсендә бара. Алтын әҙәм менән Европа, Азияның тиҫтәнән ашыу музейҙарында таныштылар ҙа инде.

Республика Милли музейында күргәҙмәне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров асты: "Беҙ былтыр ҡаҙаҡ дуҫтарыбыҙ менән осрашыуҙа мәҙәни хеҙмәттәшлекте үҫтерергә һөйләшкәйнек. Нур-Солтанда миңә "Алтын кеше" оҡшаны. 1960-1970 йылдарҙа Ысыҡкүлдә ҡурғандарҙы ҡаҙғанда сак батшаһының ҡәберлеген һәм биҙәүестәрен табалар. Экспозиция бөтә донъяға танылыу яуланы һәм күп илдә халыҡ хөкөмөнә сығарылды. Мин уны беҙгә лә алып килеүҙәрен һорағайным. Бөгөн был күргәҙмәне Башҡортостандың Милли музейында асабыҙ", - тине Башҡортостан Башлығы.

Хөрмәтле ҡунаҡтар - Ҡаҙағстандың Милли музейы директоры Арыҫланбәк Мөхәмәтулы, Ҡаҙағстандың Ҡазандағы Генераль консулы Ерлан Исхаҡов, Әл-Фараби Зәйнуллу Самашев исемендәге Ҡаҙаҡ Милли университеты профессоры Батеш Аҡпасовтарҙың ҡатнашыуы, музейға килеүселәрҙең уларға һорауҙары күп булыуы был сараның көнүҙәклегенә, мөһимлегенә инанырға ярҙам итте.

Сак ҡәбиләләре дәүеренән ҡалған биҙәүестәр, көнкүреш кәрәк-яраҡтары, ат егеү әйберҙәре тураһында һәр ҡыҙыҡһынған кеше тулыраҡ мәғлүмәт алырға тырышты. Эйе, Ҡаҙағстан археологтарының һөҙөмтәле эше һоҡланыу уятмай ҡалмай. Уларҙың асыштары, табыштары донъя кимәлендә баһалана һәм үткән дәүерҙәрҙең серҙәрен асырға ярҙам итә. Бер үк ваҡытта асылған серҙәр эргәһендә яңы һорауҙар ҙа барлыҡҡа килә. Үткән дәүер артефакттары - ташмы ул, көршәкме, таҡтасыҡмы, айыл башымы, һәр береһе үҙендә ҙур тарих һаҡлай. V-VII һынташы боронғо дәүерҙәрҙә йәшәгән ата-бабаларҙың аманаты булып килеп еткән икән, бының менән ғорурланмау мөмкин түгел. Үткән юлдың, быуаттарҙың ундай шаһиттары күп түгел. Хәйер, экспозициялағы һәр артефакт беҙҙе тарих төпкөлөнә әйҙәй, кешеләр, халыҡтар яҙмышы, йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланырға саҡыра, тормошҡа битараф булмаҫҡа өндәй кеүек. Күргәҙмә Өфөлә 29 майға тиклем буласаҡ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## ЯҢЫ ЙӘНҺҮРӘТ

**Республика Башлығы "Төньяҡ амурҙары" тигән яңы анимация фильмы сығыуын хәбәр итте.**

"Был кадрҙарҙы бер кем дә күрмәгән әле. Улар - Өфөнөң "Муха" студияһы төшөргән "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәтенең икенсе өлөшө. Унда шведтарға ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан һәм уларҙы еңгән башҡорт яугирҙарының мажаралары тураһында бәйән ителә. Әле аҙаҡҡы, өсөнсө өлөш өҫтөндә эш бара. Ул Наполеонды еңеүгә арнала, - тип уртаҡлашты республика Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - "Төньяҡ амурҙары"ның экранға сығыуын һәм яңы шедеврҙар көтөп ҡалабыҙ" .

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2021 йылдың декабрендә киноиндустрияны үҫтереү мәсьәләләре буйынса кәңәшмәлә "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәтен төшөрөү хаҡында һүҙ барғайны. Республика булышлығында "Төньяҡ амурҙары" тулы метражлы анимация фильмы - "Муха" студияһының төп проекттарының береһе. Уның өҫтөндә эште 2022 йылда тамамлау күҙаллана. "Муха" анимация студияһы директоры Артур Абдрахманов бының илһөйәрлек рухындағы ғаилә фильмы буласағын билдәләне.

## КҮРГӘҘМӘЛӘР...

**Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫы йылы, Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли кейеме көнө сиктәрендә 15 апрелдә Өфөлә II "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсының иң яҡшы эштәре күргәҙмәһе асылды һәм "Халыҡ кейеме интерпретацияһы проблемаһы" темаһына түңәрәк өҫтәл булды.**

Экспозицияла Өфө, Мәскәү, Сибай ҡалаларынан, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән, Башҡортостандың Архангел, Балаҡатай, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Мәсетле, Туймазы, Учалы райондарынан финалсыларҙың, оҫталарҙың, костюмдар буйынса рәссамдарҙың һәм дизайнерҙарҙың эштәре тәҡдим ителә. Күргәҙмә Милли музейҙа 29 апрелгә тиклем эшләй.

Ә 15 апрелдә Башҡортостан Республикаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһында фән һәм практика вәкилдәрен халыҡ кейемен реконструкциялау һәм трансформациялау, эшлекле бәйләнештәр булдырыу, фәнни һәм практик ҡаҙаныштар менән алмашыу, тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләрен реаль практикаға индереү мөмкинлектәрен тикшереү мәсьәләләренә киңерәк йәлеп итеү өсөн түңәрәк өҫтәл ойошторолдо. Унда мәҙәниәт һәм халыҡ художество кәсептәре өлкәһендәге белгестәр: билдәле этнографтар, рәссам-дизайнерҙар, ошо өлкәлә эшмәкәрлек алып барған йәмәғәт ойошмалары һәм берекмәләре вәкилдәре ҡатнашты.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҮҘЕҢДӘН АСҠА... һәм дә яланғасҡа сер бирмә

Төлкөгә баш булғансы, арыҫланға ҡойроҡ бул.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Артыҡ ныҡ күңел асыуҙар - боҙоҡлоҡ, һәм уны тәнҡитләргә кәрәк.

**(Аристотель).**

Беренсе үлемдән һуң башҡаһы юҡ.

**(Томас Дилан).**

Энтузиазмдан мәхрүм кешеләр өсөн йәшәү - ул ғазап ҡына.

**(Морис Баррес).**

Ахмаҡлыҡтар менән көрәшә торғас, иң ғәҙел һәм етди кешеләр ҙә тупаҫҡа әйләнә.

**(Фридрих Ницше).**

Әгәр ҙә белемең юҡ икән, исмаһам, мейеңде эшләт.

**(Сөләймән).**

Һәр кем бәхет артынан һунар итә.

**(Пьер Бомарше).**

Күк есемдәре - кеше яҙмыштары менән, ә Хоҙай күк есемдәре менән идара итә.

**(Келларий).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Үҙ-үҙен эҙләгән кешеләрҙе осратҡанығыҙ бармы? Кемдер таба үҙен, кемдер ғүмер буйы эҙләй. Бына шундай үҙ-үҙен эҙләгән бер кеше Буддаға килә. Будда унан: "Һин нимә эҙләйһең?" - тип һорай. "Мин үҙ-үҙемде эҙләйем. Ярҙам итсе миңә, зинһар..." - ти кеше. Будда уға: "Әгәр ҙә мин ҡушҡанды эшләргә һүҙ бирһәң, мин һиңә ярҙам итәм..." - ти. Шунда теге кеше илап ебәрә:**

**- Нисек һүҙ бирәйем ти инде мин? Мин - юҡ, шулай булғас, мин һүҙ бирә лә алмайым. Мин иртәгә нимә эшләйәсәгемде лә белмәйем, минең "минем" юҡ, минән бер ниндәй вәғәҙә лә өмөт итә алмайһығыҙ. Тырышып ҡарармын, тип әйтеүҙән башҡа бер ни ҙә әйтә алмайым. Әммә был, мин һүҙемдә торормон, тигәнде аңлатмай, сөнки мин юҡ. Мин вәғәҙә бирә һәм шул вәғәҙәһен үтәй алған нимәлер эҙләйем. Ярҙам ит миңә шул нимәнелер табырға...**

**- Мин һинән ошо һүҙҙәрҙе ишетергә теләгәйнем дә, - ти Будда. - Әгәр ҙә һин миңә нимәлер вәғәҙә итһәң, мин һиңә ярҙам итеүҙән баш тартыр инем. Әгәр ҙә һин: "Мин һүҙ бирәм, мин быны эшләйәсәкмен", - тигән булһаң, тимәк, һин ысынлап та үҙ-үҙеңде эҙләүсе түгел. Үҙ-үҙен эҙләүсе кеше үҙендә әле булмаған нәмәне эҙләй. Шулай түгел икән, эҙләнеүҙән ни файҙа! Һин - юҡ, кеше ошоно тоя икән, тимәк, ул хәрәкәттә, ул ижад итә, ул юғарыға ынтыла..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22015

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
15 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3387
Заказ - 469